ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

29 ИЮНЬ - 5 ИЮЛЬ - (ҺӨТАЙ - МАЙАЙ) 2013 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№26 (548)

✓ *Ниндәйҙер теләгеңде тормошҡа ашырыр алдынан уйла: ошондай уҡ теләкте тормошҡа ашырған башҡалар бәхетлеме?*

*(Франсуа Ларошфуко).*

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Сәбәпһеҙ ҡош осмаҫ**



3

**Яндырай түгелһеңме?**

Улайһа яңылыш аҙым яһамаҫһың



6

**Бәләкәй роль булмай...**



8-9 бәләкәй актер ғына була

**Һинең районың...**

Һинең Ватаның икәнде аңлау кәрәк



12-13

14 ТВ-программа


### ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *һабантуйҙар булып үтте. Был байрам үҙенең тарихи асылына ярашлы юғары кимәлдә ойоштороламы, әллә әҙәти байрамдарҙың береһенә әүерелдеме?*

***Фәтих ИШБИРҘИН, хеҙмәт ветераны:*** Донъялар ниндәй генә булғанда ла халҡыбыҙ күңел төшөнкөлөгөнә бирелеп, зарланып ултырмаған, борон-борондан ат еткән ергә - ат, хат еткән ергә хат ебәреп, һабантуй ише оло йыйын үткәрер булған. Берҙән, оҙон ҡыштан һуң йәш үләнгә баҫыу шатлығынан күңел яҙып алыуға форсат тыуһа, икенсенән, һабантуйҙың уйын-көлкөнән юғарыраҡ маҡсаттарға, изге йөкмәткегә ҡоролоуын да беләбеҙ - халҡыбыҙ рухын, милләт көсөн, батырҙарын барлау сараһы ла булған бит ул һабантуй. Уның ат сабышы - бәйге, көрәш, осона бүләк эленгән һырғауылға үрмәләү, көршәк ватыу, бер яҡ башы ергә ҡаҙып ултыртылған сайҡалып торған бүрәнә буйлап барып, уның икенсе осондағы аҡ тәкәне алыу, аяҡтарға тоҡ кейеп йүгереү кеүек ритуалдарын беҙ ҡыҙыҡ тамаша итеп кенә ҡарайбыҙ. Ә бит борон уларҙың һәр береһе анығ йөкмәткене аңлатҡан. Был хаҡта мин "Киске Өфө" гәзитенең 23-сө һанында ғилми хеҙмәткәр Зәкирйән Әминевтың "Башҡорт һабантуйы хаҡында" тигән мәҡәләһен уҡып ҡына белдем. Ғалим башҡорттоң боронғо мифологик, этнографик, фольклор материалдарынан сығып, һабантуйҙа үткәрелгән был тамашаларҙың донъя яралған саҡта уҡ әле иң боронғо ата-бабабыҙ - Урал батыр тарафынан башҡарылыуы хаҡында бәйән итә. Ритуалдарҙың тейешле итеп, теүәл үтәлеше башҡорт донъяһының именлегенә йоғонто яһай, тип ышанған борон халҡыбыҙ. Мәҫәлән, ике батырҙың көрәшен аҡ, саф, изге көстәрҙең яуыз ҡара көстәргә ҡаршы көрәше тип аңлағандар. "Урал батырҙың ҡыштың, теге донъяның символы булған үгеҙ менән көрәшен һәм был көрәштә еңеүен яҙҙың ҡышты еңеүе тип аңларға кәрәк", тип яҙа мәҡәлә авторы. Һырғауылға менеүҙе күккә олғашып, унда Тәңренең үҙе менән күрешеп, унан бүләк алып төшөүгә тиңләгәндәр, ти ул. Был мәҡәләне уҡығандар һабантуй йөкмәткеһенең "Урал батыр" эпосы, башҡорттоң башҡа фольклор материалдары менән сағыштырыу һәм параллелдәр үткәрелеп, ҡыҙыҡлы оҡшашлыҡтар (хатта асыштар тип әйтер инем) табылыуы тураһында уҡып белгәндер. Дәлилдәрҙең аныҡ тарихи ерлеге, ярылып ятҡан логикаһы бар. "Киске Өфө"гә һәм уның әлеге мәҡәлә авторына рәхмәт: мин хәҙер үҙем өсөн һабантуй байрамын өр-яңынан астым. Башҡаларға ла ошо мәҡәләне уҡырға кәңәш итәм һәм милләттәштәремә, һабантуй - ул изге йола башҡарыу, уны мәғәнәһенә төшөнөп үткәрәйек, йөкмәткеһенән тайпылыуға юл ҡуймайыҡ, боронғо йолаларыбыҙға ҡарата һаҡсыл булайыҡ, тип өндәшәм.

**(Дауамы 2-се биттә).**

### ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ДОНЪЯЛАРҘЫ ИҢЛӘЙ ҺАБАНТУЙ

**Төрки халыҡтарының дөйөм байрамы булған һабантуйҙар хәҙер май аҙағынан июнь аҙағына тиклем илдең бик күп ҡалаларында, төбәктәрендә үткәрелә килә. Шөкөр, ошондай иң яуаплы осорға - яҙғы эштәр тамамланыуына, киләһе уңышҡа нигеҙ һалыныуына, тәбиғәттең төрлө ырым-ишараларына арналған күркәм байрамыбыҙҙы күп халыҡтар үҙ итте.**

Әле үткән аҙнала ғына республика делегацияһы Силәбе, Ҡорған, Пермь, Санкт-Петербургта үткән һабантуйҙарҙа ҡатнашып, ул төбәктәрҙә йәшәгән милләттәштәр менән аралашып, матур байрам күстәнәстәре - артистарыбыҙ сығыштарын бүләк итеп йөрөп ҡайтҡайны. Был аҙнала иһә илдең баш ҡалаһы Мәскәүҙә лә гөрләйәсәк һабантуй. Эйе, заман ниндәй генә мөғжизәләр, ниндәй генә тылсымлы технологиялар уйлап сығармаһын, кешенең үҙ асылына, тәбиғилеккә, ергә ереккәнлеге барыбер үҙенекен итә. Ә һабантуй бына шундай тәбиғилекте лә, хеҙмәт кешеһенә хөрмәтте лә, халыҡсанлыҡты ла алға һөргән байрам ул. Шуға ла ул донъя яулай, донъя иңләй.



Ҡорған өлкәһе Сафакүл районы һабантуйында.

ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# ШӨҒӨЛӨМ...

## тәмле лә, килемле лә



**Байрамдар миңә бала саҡтан аш бүлмәһенән килгән ванилин еҫе һәм өләсәйем бешергән тәмле торттар менән иҫкә төшә. Хуш еҫ бөркөгән һәм ауыҙҙа иреп торған ошо тәмлекәстәрһеҙ мин бер табынды ла күҙ алдына килтермәйем. Әгәр ҙә торт теге йәки был тантана темаһына тура килтереп, үҙенсәлекле итеп бешерелһә, тыуған көндәр һәм башҡа байрамдар бигерәк тә күңелле уҙған кеүек. Шуға күрә өләсәйемдең был осталығын, маһирлығын ентекле өйрәнеү һәм "тәмле" эштең бар нескәлеген белеү өсөн һәр ваҡыт уның янында өйрәлдөм. Ваҡыты еткәс, миңә был ныҡ ярҙам итте.**

Шулай тура килде - хаҡлы ялға сығыуға бер-нисә йыл ҡалғас, ҡыҫҡартыуға эләгеп, эшһеҙ ҡалдым. Пенсия йәшенә етеп барған кешене эшкә алырға теләүселәр табылманы һәм миңә аҡса эшләүҙең төрлө юлдарын барларға, эҙләргә тура килде. Тырышҡан - таба, тиҙәр. Мин дә таптым: элек-электән күңел биреп эшләгән шөғөлөмдө - төрлө торттар бешереүҙе - ғаиләмә килем килтереүсе сығанаҡҡа әйләндерҙем. Тәүҙә үҙемдең хеҙмәтемде ҡыйыр-ҡыймаҫ дуҫтарыма, таныштарыма тәҡдим иттем. Магазин кәштәләрендә бихисап төрлө торт һатылғанда, бәлки, уларҙың өйҙә бешерелгән кондитер ашамлыҡын алырға теләктәре лә булмағандыр, шулай ҙа мине үпкәләтмәҫ өсөн, күрәһең, береһе лә баш тартманы. Бар күңелде һалып башҡарған эш һәр саҡ уңышлы була. Минең дә бөтә тырышлығымды биреп, осталығымды һалып, күңелемде биреп эшләүем үҙенекен итте - торттарыма һорау артты. Таныштарым һәм дуҫтарым байрам өҫтәленә ҡуйыр өсөн тортты тик минән бешертә башланы. Артабан инде, халыҡ әйтмешләй, "сарафан радиоһы" үҙ эшен эшләне - заказдар көндән-көн күбәйҙе. Һәр уңышлы эшемде мин фотоһүрәткә төшөрөп, махсус каталог эшләнем. Һәм килгән кеше унан үҙенә оҡшағанын һайлай. Шулай уҡ булаҫаҡ ваҡиғанан сығып, тортты биҙәүҙең башҡа төрлө юлдарын да тәҡдим итәм. Мәҫәлән, үҙе шиғыр яҙып, гитарала башҡарыусы танышыма торттағы биҙәкте нәҡ уның гитараһы рәүешле һынландырҙым һәм торт өҫтөнә яңы һыңа яҙған йырының бер юлын яҙҙым. Башланғыс кластар уҡытыусыһына тортты "Әлифба" китабы кеүек итеп бешерҙем. Бындай зауыҡлы, үҙенсәлекле торттар бөрөүҙе лә битараф ҡалдырмай. Шулай уҡ туй тантанаһына ла тәмлекәстәрҙе төрлө формала һәм төрлө биҙәкле итеп бешерәм.

Бейек торттарҙы өйҙәге ябай духовкала бешереү мөсөләһен дә хәл итергә тура килде. Тәүҙә мейескә һыйғандай итеп бәләкәй корждар бешереп алам һәм һуңынан уларҙы бергә ҡушып, кәрәкле дәүмәлдәге торттар эшләйем. Ваҡытты күп ала, әлбиттә, ләкин килеп сыҡҡан һөҙөмтә уңышлы булһа, барыһы ла онотола. Ғөмүмән, бер ҙур тортты бешереүгә 5-6 сәғәт ваҡытымды бүләм. Көнөнә, кәмендә, икешәр торт эшләргә мөмкин. Торт бешереү өсөн кәрәкле аҙыҡ-түлекте күмәртәләп һатып алам. 5-6 килограммлыҡ бер торт бешереү өсөн уртаса 900-1000 һум аҡса китә, ә әҙер тортты кәмендә 1500-2000 һумға һатам. Шулай итеп, бер торттан 500-1000 һум тирәһе тере аҡса эшләйем. Бына шулай, эшһеҙ ҡалдым, тип ҡул ҡаушырып ултырмаҫҡа, үҙемә ошондайыраҡ берәй шөғөл табырға кәңәш итәм әхирәттәргә.

**Хәлимә ИҘРИСОВА,**
**Октябрьский ҡалаһы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Һабантуйҙар булып үтте. Был байрам үҙенең тарихи асылына ярашлы юғары кимәлдә ойошторолами, әллә әҙәти байрамдарҙың береһенә әүерелдеме?

(Башы 1-се биттә).

***Нәфисә ТУЛЫБАЕВА, БР Халыҡ ижады үҙәгенең директор урынбаҫары:*** Быйыл миңә өс урында булып үткән һабантуйҙарҙы ҡарау бәхете тейҙе: Ишембай, Салауат райондарында һәм Өфө ҡалаһында. Баш ҡалабыҙҙа был байрам Ҡала көнөнә арналған саралар менән үрелеп барҙы. Шул көндәрҙә Өфөлә барған "Берҙәмлек" халыҡ-ара фестивалендә ҡатнашыусылар ҙа тамаша ҡылды милли йола байрамыбыҙға. Сит ил ҡунаҡтарына халҡыбыҙҙың көнкүрешен, йолаларын, йәшәү рәүешен, сәнғәтен һабантуйҙан да яҡшыраҡ итеп күрһәтеүсе башҡа берәй байрам сараһы бармы икән! Һүҙ ҙә юҡ, һабантуйҙар бик яҡшы ойошторолған булыуы менән айырылып торҙо. Салауат районында ла ул бынан алдағы йылдарҙа ошонда гөрләп үткән Салауат көндәре рухында барҙы, салауаттарҙың ана шул оло йыйын кимәленә тоғро ҡалыуҙарын күреп шатландыҡ. Ә шулай ҙа йыл һайын бер үк нәмә ҡабатланмаһын өсөн, бәлки, йыл тематикаһына бәйле концепцияны үҙгәртеп тороу ҙа кәрәктер? Мәҫәлән, быйылғы Тирә-яҡ мөхитте һаҡлау йылында һабантуй сараларында ошо тематиканың да бер ни тиклем урын алып тороуы яҙыҡ булмаҫ ине. Тирмәләр ярыштарын үткәргәндә аш-һыу, ҡул эштәре күргәҙмәләрендә тәбиғәт байлыҡтарын күрһәтеүҙең дә отошло юлдарын табырға була бит. Шифалы дарыу үләндәренән йыйылған экспозиция, миҫал өсөн. Әйткәндәй, тирмәләр янында һабантуй ҡарарға килгән халыҡ менән йәнле аралашыу саралары ла етеңкерәмәй, минең ҡарашҡа. Тирмә янында балаҫ һуғыу станогы йә булмаһа ҡул тирмәне тора икән, ул ҡоро экспозиция ғына булып тороуҙан туҡтап, аралашыу сараһына әүерелергә тейештер ул. Бәлки, һабантуйға килеүселәрҙән, ҡунаҡтарҙан берәйһенең үҙ ҡулдары менән балаҫ һуғып ҡарағыһы, талҡан тартып ашағыһы киләләр. Был бигерәк тә балаларҙа ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырыр ине.

Һабантуй йәмен боҙоусы бер хәл тураһында ла әйтеп китмәй булдыра алмайым. Ул да булһа, иркенләп тын алырға ла бирмәй, барлыҡ һабантуй майҙанын баҫып алыусы шешлек төтөнө. Беренсенән, был беҙҙең милли ризыҡ түгел, уны ҡайҙалыр ситтәрәк тотҡолорға лә булалыр. Икенсенән, 40 градусҡа етерҙәй эҫелә халыҡҡа ниндәй шарттарҙа әҙерләнеүе лә билдәһеҙ булған ҡыҙҙырылған ит тәҡдим итеү - санитар-гигиена талаптарын ғына түгел, халҡыбыҙҙың төп байрамы йолаларын да һанға һуҡмау ул. Дөйөм алғанда, һабантуйға халҡыбыҙ ихлас, яҡшы әҙерләнә. Бәхеткә күрә, эсеп, болғанлап йөрөүселәр ҙә юҡ хәҙер.

***Зөлфиә СИБӘҒӘТОВА, медицина хеҙмәткәре:*** Элекке, беҙ бала саҡтағы һабантуйҙар юҡ бит инде ул хәҙер. Ағайҙарымдың йыл буйына һабантуйҙа көрәшергә әҙерләнеп, күнекмәләр үткәреүе, бәләкәй малайҙарҙың һабантуйҙа сабышҡа сығасаҡ колхоз аттарын тырышып тәрбиәләүе, хатта апайҙарымдың һабантуй өсөн махсус сигеүҙәр, бәйләмдәр бәйләп, уларҙы тантаналы рәүештә һабаға элеп ҡуйыуҙары матур бер хәтирә булып ҡалған. Совет заманында байрамдың бәҫен ебәрҙеләр. Шуға ла һабантуйҙарға бик йөрөп бармайым, сөнки ундағы матур күренештәрҙән бигерәк, насарҙары - иҫерек кешеләр, төп майҙандан ситкәрәк сығып, эскелек табындары ойоштороуҙар, хатта көрәш майҙанында батырҙарҙың да хәмер тәьҫирендә бәүелеп-сайҡалып, клоунға әйләнеп, әйҙәләүгә түгел, көлкөгә ҡоролоуы күберәк күҙгә ташлана. Быйыл иһә юғарынан, республика хөкүмәте кимәленән "Һабантуй - айыҡлыҡ территорияһы" тигән лозунг төшөрөлгән, тиҙәр. Был һиҙелде лә. Үҙемдең тыуған районымдағы һабантуйҙа ла, башҡа райондарҙағы таныштарым һөйләүенсә лә, матур байрамдың йәмен боҙоп йөрөүсе иҫеректәр күренмәне. Һира-араҡы кеүек алкоголле эсемлектәр һатылғаны ла тойолманы. Әммә... "Һабантуй - айыҡлыҡ территорияһы" тигән лозунгты ябай халыҡ күтәреп алып, үҙен тәртипкә күндерһә, райондар етәкселәре һәм эреле-ваҡлы хужалыҡтар, ойошма-предприятиелар етәкселәре үҙҙәре ҡорған тирмәләрҙә ситтән килгән ҡунаҡтарҙы әлеге шул "утлы һыу" менән һыйлау тигәндән тыйылманы. Һабантуй программаһынан һуң майҙанға ҡоролған тирмәләргә иҫерек йыр тауыштары яңғырап тора ине инде. Ә ҡайтыша башлаған халыҡ ул тирмәләр янынан "Үәт, байрам итәләр!" тип, йылмайышып үтте. Тик бер тирмә хужалары ғына матур өлгө күрһәтте халыҡҡа: тирмә майҙанында төрлө уйындар ойоштороп, һәр кемгә унда ҡатнашыу һәм тәмлекәс-призлар эләктереү мөмкинлеге бирҙе. Ә ярыштарҙа ҡатнашмағандар, шулай уҡ мин үҙем дә, майҙандың бер ситендә ҡуйылған өҫтәлдә ҡоймаҡлап самауыр сәйе эстек. Был һый түләүле ине, ә шулай ҙа ошо өҫтәл тирәһендәгеләрҙең барыһы ла был кәмәлдән ҡәнәғәт ҡалды. Тирмәне хеҙмәтләндереүселәр ҙә ҡәнәғәт ине: хеҙмәт көсө, осталыҡ һалып бешерелгән ризыҡтарынан аҙ булһа ла аҡса инде ҡулдарына...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ

# АСЫЛЫМДЫ АСТЫ...

## "Киске Өфө"

**Бынан туғыҙ йыл элек беренсе тапҡыр "Киске Өфө"нө ҡулыма алдым һәм әлегәсә төшөргәнем юҡ. Ошо йылдар эсендә күңелемә яҡын темаларҙы яҡтыртҡан баҫма тоғро дуҫыма әйләнде, бик күп нәмәгә күҙҙәремде асты.**

Мәҫәлән, бик күптәрҙең башын харап иткән эскелек темаһын ғына алайыҡ. Гәзиттәге мәҡәләләрҙе уҡып, мин үҙемдә был ағыуҙан баш тартырға көс таптым һәм башҡаса бер ҡасан да ауыҙыма алмаясаҡмын.

Беҙ бай тарихлы халыҡ. Ошоно онотмаҫҡа һәм үҙ үткәнебеҙҙе белергә тейешбеҙ. Был йәһәттән "Киске Өфө"нөң роле баһалап бөткеһеҙ. Гәзит яҡтыртҡан тарихи темаларға ҡағылышлы мәҡәләләрҙе уҡып, мин үҙ асылымды, рухи тамырҙарымды таптым. Шулай уҡ башҡа мәҡәләләр һәм рубрикалар ҙа фәһемле, халыҡҡа ҡыҙыҡлы булған темаларҙы яҡтыртыуы менән күңелгә ятышлы. Эшҡыуарлыҡ өлкәһендә уныш ҡаҙанған милләттәштәр, спортсылар, сәйәсмәндәр хаҡындағы мәҡәләләр ҙә бик уҡымлы. Артабан да халҡыбыҙҙың күркәм шәхестәре хаҡында яҙып тороғоҙ, тип теләге киләм. Шулай уҡ халҡыбыҙҙы борсоған төрлө мәсьәләләрҙе күтәреп сығыу йәһәтенән дә "Киске Өфө" нөң роле ҙур. Гәзит биттәрендә тағы ла ауылдар яҙмышы, йәштәр араһындағы эшһеҙлек, ер кеүек актуаль темаларға ҡағылышлы материалдарҙы ла күргә киләм.

**Ғәфүр СОЛТАНМОРАТОВ.**
**Ишембай районы Әхмәр ауылы.**

# НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Һамарҙа Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Рәсәй Президентының Волга буйы федераль округындағы Тулы хоҡуҡлы вәкиле ҡарамағындағы Совет ултырышында ҡатнашты. Ултырышта округ төбәктәрендә урындағы үҙидараны үҫтереү мәсьәләләре тикшерелде, тип хәбәр иттеләр төбәк башлығының матбуғат хеҙмәтенән. Дәүләт башлығының Тулы хоҡуҡлы вәкиле Михаил Бабич билдәләүенсә, башҡа власть органдарына ҡарағанда, урындағы үҙидара халыҡҡа яҡыныраҡ тора, шуға күрә муниципаль власть органдарының үҫеше, шул иҫәптән уларҙың иктисади үҙ аллылығын арттырыу, айырыуса мөһим.

✓Башҡортостан делегацияһы 29 июндә Пермь крайының Барда ҡасабаһында үтәсәк IV Бөтә Рәсәй ауыл һабантуйында ҡатнашасаҡ. Сараға илдең 19 төбәгенән меңдән ашыу кешенең килеүе көтөлә. Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Салауат Сәғитов етәкселегендәге рәсми делегация составында Тәтешле һәм Дүртөйлө райондарының хакимиәт башлыҡтары Рушан Гәрәев һәм Ринат Хәйруллин, "Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Румил Аҙнабаев, төбәктең мәҙәниәт министры урынбаҫары Рәнис Алтынбаев бар. Байрамды ойоштороусылар булып Пермь крайы хакимиәте, Башҡортостандың һәм Татарстандың Мәҙәниәт министрлыҡтары сығыш яһай.

✓РФ Президентының элекке ярҙамсыһы Эльвира Нәбиуллина 24 июндән Рәсәй Банкы рәйесе вазифаһын башҡара башланы. Быға саҡлы был вазифаны 2002 йылдың мартынан алып Сергей Игнатьев үтәне. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, Рәсәй Банкы рәйесе вазифаһына Эльвира Нәбиуллина кандидатураһын 2013 йылдың мартында РФ Президенты Владимир Путин тәҡдим иткәйне. Апрелдә Дәүләт Думаһы бер тауыштан тиерлек был башланғысты хупланы. Кандидатура өсөн 360 депутат тауыш бирҙе, 20-һе - уға ҡаршы булды, бер парламентарий тауыш биреүҙән тыйылды.

✓Өфөлә Башҡортостан Республикаһы дүртенсе саҡырылыш Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың яҙғы сессияла һуңғы ултырышы үтте. Ағымдағы йылдың көҙөндә парламентарийҙар яңыртылған составта эшләй башлаясаҡ. Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов депутаттарға сифатлы, һөҙөмтәле эшләгәне өсөн рәхмәт әйтте.

МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ

# СӘБӘПҺЕҘ ҠОШ ОСМАҪ

**Донъяла бер генә ғәмәл дә, эш тә, хәрәкәт тә былай ғына, көн уҙһын, сабата туҙһын өсөн генә башҡарылмай, тигәнде аңлата булыр был әйтем. Һәр ғәмәлдең, хәрәкәттең, эштең башҡарылыу сәбәбе була, сәбәп бар урында маҡсат та барлыҡҡа килә. Маҡсат хәрәкәткә, йүнәлешкә барып олғаша. Мәҡәлдә әйтелгәнсә, ҡоштарҙың көнитмешкә йәғни аҙыҡ эҙләүгә, бала осорорға өйрәтеүгә, йылы яҡҡа осоп китеүгә бәйле булмаған маҡсатһыҙ, былай ғына осоуын да ниндәйҙер сәбәпкә бәйләп аңлатып була, тимәк. Улар осҡан саҡтарында Аллаға зекер әйтә, маҡтау йырлай, шунаң өсөн дә Туфан һыуы ҡалҡанда ағас, ҡая баштарына осоп ҡунып һаҡланып ҡалыу өсөн Хоҙай уларҙы ҡанатлы иткән, тиҙәр. "Ҡош аулаған йәлсемәҫ" тигән әйтем тураһында һүҙ барғанда был хаҡта киңәйтелгән формала һүҙ алып барғайныҡ. Тимәк, ҡоштарҙың осоуы илаһи маҡсатҡа бәйле. Сәбәпһеҙгә ҡош осмай икән шул.**



Кешеләр күпләп инеп-сығып йөрөгән бина тупһаһында бер һуҡыр кеше хәйер һорашып ултырған. Уның ҡулындағы эс яғы өҫкә әйләндерелеп ҡуйылған эшләпәгә "Тыумыштан һуҡырмын, зинһар өсөн, минә ярҙам итегеҙ!" тигән яҙыу беркетелгән. Хәйер һорашыусының янынан үтеп барыусы бер кеше туҡталып ҡалған һәм, байтаҡ ҡына ваҡыт ултырыуына ҡарамаҫтан, уның эшләпәһенә бик аҙ ғына аҡса йыйылыуына иғтибар иткән. Ул хәйерсенең эшләпәһенә байтаҡ ҡына аҡса һалып, уның рөхсәтенән тыш ҡағыҙҙың икенсе яғын әйләндереп, унда яңы һүҙҙәр яҙып, кире эшләпәгә беркеткән дә үҙ юлында булған.

Кискә был кеше хәйер һорашыусының яғына әйләнеп ҡараһа, уның эшләпәһе лыҡа тулы аҡса икән. Һуҡыр хәйерсе уны атлауынан танып да:

-Яҙыуҙы һеҙ үҙгәрткәйнегеҙме? Ә нимә тип яҙғайнығыҙ унда? - тип һораған.

-Унда мин артыҡ бер ни ҙә яҙманым, бары тик һеҙ әйткән фекерҙе икенсе төрлә һүҙҙәр аша аңлатырға тырыштым, - тип йылмайған да был кеше, һуҡыр хәйерсе янынан китеп тә барған.

Ә үтеп барыусы кеше ҡағыҙға ниндәй һүҙҙәр яҙған, тип уйлайһығыҙ? "Йәмле яҙҙар килде, ә мин шул яҙҙарҙы күреүҙән мәхрүммен" тигән яҙыуҙы уҡыған һуҡыр хәйерсенең ҡулындағы эшләпәгә аҡса һалып үтеүселәр.

Ошо ваҡиғанан беҙ нимә күрәбеҙ һуң? Эйе, үтеп барыусы кеше башҡаларҙан һуҡыр хәйерсене йәлләтерлек һәм мул ғына хәйер һалырлыҡ сәбәпте уйлап сығарған, йәғни дини китаптағы "сәбәп ҡыл" шартын барлыҡҡа килтергән. Хәлһеҙгә, хәйерсегә эскерһеҙ, алмашына бер ни ҙә там итмәйенсә, ярҙам итеү өсөн дә ниндәйҙер сәбәптең булыуы шартмы икәнме ни? Ҡыҙыҡ та, ҡыҙғаныс та был хәл-күренеш. Тик шулай ҙа бер маҡсатһыҙ осоп йөрөүсе ҡоштарҙы күҙ алдына килтерһән, был мәсьәләгә бөтөнләй башҡа күҙлектән ҡарай башлайһың. Тимәк, үтеп барыусы кеше тегә ҡағыҙға ҡанатлы вә сихри һүҙҙәрҙе яҙып, башҡа кешеләрҙең күңелендә илаһи тойғоларҙы уята алған, йәғни Аллаһы Тәғәләнең барлығын уларҙың иҫенә төшөргән. Беҙ йыш ҡына урамдарҙағы хәйер һорашыусылар янынан үткән саҡта ошо илаһилыҡ хаҡында онотоп, шаһитлыҡ итеүсе яңығыбыҙҙағыларҙан оялған өсөн, йә сумарт, изге күңелле булып күренер өсөн генә хәйер һалып үтәбеҙ, бугай.

Урынлы һорау тыуа: изгелек ҡылыр өсөн дә сәбәп кәрәкме икән ни? Был осраҡта кеше ниндәйҙер маҡсаттан сығып эш итһә, уның был ғәмәле изгелек тип аталырға хаҡлымы? Изгелек иҫәпкә ҡороламы? Әгәр ҙә ҡоролһа, ул изгелек тип аталамы? Ошо урында тағы ла "Сәбәпһеҙ ҡош осмай" әйтеме иҫкә килеп төшә һәм барыһы ла аңлашыла: әҙәм балаһы Аллаһы Тәғәләгә яҡынырак булыр, уның сауабын алыр, рәхмәтле булыр өсөн изгелек ҡылған осраҡта ғына был ғәмәле изгелек тип аталырға хаҡлылыр.

Донъяла сәбәпһеҙ ҡош осмау ғына түгел, хатта сәбәпһеҙгә сабый ҙа иламай. Ысынлап та, үҙҙәрен уңайһыҙ хәлдә тойоуҙан башҡа сәбәптәрҙән (асығыу, еүешләнеү, ҡолау, ауырыу һ.б.) тыш, ни өсөн илай һуң сабыйҙар? "Кеше үҙенең тойғоларын белдергән саҡта ғына үҙен тере итеп тоя ала. Илаған саҡта сабый бала үҙендә йыйылған асыуҙы, насар тойғоларҙы ҡыуалап сығарып, мөхәббәт тойғоһона урын һыны бушата. Асыу, ярһыулыҡ булмаған күңелгә генә мөхәббәт тойғоһон индереп була. Бары тик буш һауытҡа ғына нимәләр һалып була..." ти был хаҡта Татьяна Ки "Дауалаусы белешмәһе" тигән китабында. Бына бит нисек, тимәк, бала илауында ла илаһи маҡсат бар. Был осраҡта инде баланы иламаҫҡа өндәп йыуатыу ҙа, ҡурҡытыу ҙа, ҡағып алыу ҙа урынһыҙ. Дөйөмләштереп әйткәндә, бала илауында шундай сәбәп бар: бала үҙендә Хаҡ Тәғәләне тойор өсөн илай йәки Хоҙай уны илатып, үҙенә яҡынлатырға итә.

Сәбәпһеҙгә бал ҡорто ла саҡмай. Билдәле, бал ҡорттары үҙҙәренә һәм балаларына тип йыйылған балды алырға теләүсене саға. Шуныһы ҡыҙыҡлы: ә ни өсөн бал ҡорто ояһына төтәткес менән төтән ебәргәндән һуң, бал ҡорттары кешене саҡмай һуң? Бәҡтиһәң, борон-борондан урманды төйәк итеп йәшәүсе был йәндәрҙең инстинктында янғындан һаҡланыу механизмы органик рәүештә нығынған икән. Төтән ебәргән саҡта бал ҡорттары был хәлде янғын сығыу тип ҡабул итә. Бөтә иләүгә хәүеф тураһында тревога иғлан ителә һәм барыһы ла йәшен тиҙлегендә кәрәҙҙәргә ташланып, ундағы балды янғындан һаҡлап ҡалыр өсөн ауыҙҙарына һәм бал йыя торған барлыҡ ағзаларына тултыра икән. Был осраҡта уларҙың балды алырға килеүселәрҙә эше лә булмай, икенсенән, үҙҙәре бал менән лыҡа тулы булғас, ҡаяуҙарын да кешегә ҡаҙай алмай икән. Тимәк, был саҡта ла бал ҡорттарының кешене саҡмауында илаһи сәбәп бар, ул да булһа иләү, бигерәк тә үҫеп килгән балалары өсөн мөмкин тиклем күберәк балды янғындан һаҡлап ҡалыу.

Тәбиғәттә үлән емшәүсе йәнлектәр ҙә, уларҙың үҙҙәре менән туҡланыусы йыртҡыс хайуандар ҙа бар. Ғалимдар фекеренсә, Хоҙай үлән емшәүселәрҙе һаҡлар өсөн йыртҡыс хайуандарҙы бар иткән. Әгәр ҙә уларҙың икенселәре булмаһа, тәүгеләрен үләт ҡырыр ине. Донъяла хатта ҡороҡкос тип һаналған бөжәктәр ҙә былай ғына барлыҡҡа килмәгән. Әйтәйек, Американың бер штаты атамаһын йөрөтөүсе колорадо ҡуңыҙын, йә булмаһа, ҡара синерткәне (саранча), йә булмаһа, һуңғы йылдарҙа пәйҙә булған рапс ҡуңыҙын алайыҡ. Әгәр ҙә улар донъяға пәйҙә булған икән, уларҙың да илаһи маҡсаты бар. Беҙҙең сәсеүлектәргә, картуф баҫыуҙарына һөжүм итеп зыян килтергәндәре өсөн генә беҙ уларҙы ҡороҡкос тип атайбыҙ. Ә бит улар ҙа, һәр тере йән кеүек, Хоҙайҙың яратҡандары. Үҙебеҙҙе ашатҡан, эсергән, кейендергән, һыйындырған тәбиғәткә ҡарата хилаф ҡарашыбыҙҙан арындырыр, беҙҙе һиҫкәндерер, нәфсебеҙҙе тыйыр өсөн бит Хоҙай уларҙы бар иткән. Һәр хәлдә, уларҙың барлығында ошондай сәбәп ята. Юҡҡа ғына Әҙәм менән Һауаны ергә "һөргөнгә" оҙатҡан саҡта Хоҙай уларға Иблисте эйәртеп ебәрмәгән. Ҡанатлылар сәбәпһеҙ осмай шул...

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай йортонда Башҡортостандың Үҙәк һайлау комиссияһы төбәктең Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары буйынса агентлығы менән кәңәшмә үткәрҙе. БР Үҙәк һайлау комиссияһы рәйесе Хәйҙәр Вәлиев БР-ҙың бишенсе саҡырылыш Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға депутаттар һайлау буйынса һайлау кампанияһын үткәреүгә әҙерлек мәсьәләләре тураһында һөйләне. Үҙәк һайлау комиссияһы рәйесе алдағы һайлауҙарҙа ла халыҡ араһында мәғлүмәт таратыу һәм агитация үткәреү мәсьәләләре буйынса артабанғы хеҙмәттәшлеккә ышаныс белдерҙе.

✔Берҙәм тауыш биреү көнө - 8 сентябрҙә Башҡортостанда 212 һайлау кампанияһы үткәреү планлаштырыла. Дөйөм алғанда 396 депутат мандаты алмаштырыласаҡ, тип хәбәр иттеләр БР Үҙәк һайлау комиссияһының матбуғат хеҙмәтенән. Мандаттар араһынан 110-ы (ҡатнаш система буйынса) Башҡортостан Республикаһы бишенсе саҡырылыш Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға һайлауҙарҙа алмаштырыласаҡ. Муниципаль район һәм ҡала округы Советтарына депутатлыҡҡа өҫтәмә һәм ҡабаттан һайлауҙар буйынса йәнә 12 һайлау кампанияһы үткәреләсәк, уларҙа 12-шәр депутат мандаты алмаштырыласаҡ. Шулай уҡ 234 мандат ауыл һәм ҡала биләмәләре Советтарына депутатлыҡҡа өҫтәмә һайлауҙар сиктәрендә алмаштырыласаҡ. Был йәһәттән 197 кампания үткәреү ҡаралған.

✔"Берҙәм Рәсәй" партияһының Башҡортостан төбәк бүлексәһе конференцияһында берҙәм һайлау округы буйынса Башҡортостан Республикаһы бишенсе саҡырылыш Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға депутатлыҡҡа кандидаттар исемлеге һәм бер мандатлы һайлау округтары буйынса исемлек раҫланды. Ҡарар йәшерен тауыш биреү юлы менән ҡабул ителде. Берҙәм һайлау округы буйынса исемлеккә 158 кандидатура, шул иҫәптән дөйөм республика исемлеге буйынса өс кандидатура - Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов, эшҡыуар Илья Кулаков һәм "БЮТ" телеканалының баш мөхәррире Эльвира Айытҡолова инде. Бер мандатлы һайлау округтары буйынса исемлеккә 55 кеше инде. "Берҙәм Рәсәй"ҙең дөйөм исемлегендә - 213 кандидат. Улар партия эсендә алдан тауыш биреү йомғаҡтары буйынса тәҡдим ителде.

**"Башинформ"дан.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ЭШЕҢ ДӘ...
## ашың да булһын, тиһәң

**Һуңғы ваҡытта баш ҡалала шундай тенденция күҙәтелә: эшһеҙ булып рәсми теркәлгәндәр һаны кәмей бара, ә эш урындары артҡандан-арта. Бөгөнгә баш ҡалала 6645 эшһеҙ теркәлһә, 24549 вакантлы эш урыны бар.**

Мәсьәлә бары шунда ғына - юғары белем тураһында дипломы булғандар, эш урындары булһа ла, эшсе һөнәрҙәрен үҙләштерергә теләмәй. Ә тәкдим ителгән вакансияларҙың 83 проценты эшсе һөнәрҙәренә тура килә. Ахырҙа, бынан бер нисә йыл элек гәзитебеҙҙә йәш бер белгестең әйткән фекере менән килешмәй сара ҡалмай: "Тиҙҙән барлыҡ урам һепереүселәр ҙә юғары белемле буласаҡ".

Баш ҡала округы хакимиәтендә уҙған сираттағы матбуғат конференцияһы, аңлауығыҙса, тап хеҙмәт баҙары һәм унда хеҙмәт ҡануниәтенең һаҡланыуы хаҡында булды. Был тармаҡтағы хәл-торош менән ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Рәмил Дилмөхәмәтов һәм ошо өлкәләге белгестәр таныштырҙы.

- Бөгөн эш биреүселәрҙең күпселеге хеҙмәт ҡануниәтен үтәмәй һәм хеҙмәткәрҙәренә социаль гарантиялар бирмәй. Бигерәк тә был бәләкәй эшҡыуарлыҡ етәкселәренә һәм шәхси эшҡыуарҙарға ҡағыла, - тине Рәмил Хөрмәт улы. - Улар тоторо̄ҡло хеҙмәт коллективының предприятиеға йыш алмашынып торған хеҙмәткәрҙәргә ҡарағанда ҙурыраҡ файҙа килтереүен аңламай. Киләсәккә йүнәлеш алмайынса тиҙ арала байыу маҡсатын алға ҡуйған эшҡыуарҙарҙың эшмәкәрлеге тиҙ арала артабан йәшәүгә һәләтен юғалта. Һөҙөмтәлә предприятиелар банкротҡа әйләнә, эшҡыуарҙар эшен ябырға мәжбүр була, уларҙың эшселәре эш хаҡы ала алмай. Дәүләт власы һәм урындағы үҙидара органдары бындай күренештәргә юл ҡуймаҫҡа тырышһа ла, барлыҡ эш биреүсене лә күҙ уңында тотоу мөмкин түгел. Шуның өсөн эшкә урынлашыусылар үҙҙәренең хоҡуҡтарын белергә бурыслы. Бында инде иң мөһиме - эшкә урынлашҡанда хеҙмәт килешеүе төҙөү. Әгәр эш биреүсе хеҙмәт килешеүе төҙөргә теләмәй икән, тимәк, ул хеҙмәт ҡануниәтен һанға ла һуҡмай һәм ниндәйҙер бәхәсле мәл килеп тыуғанда йәки эш судҡа барып еткәндә, уның ғәйебен дәлилләү мөмкин булмаясаҡ. Һөҙөмтәлә эшсе хеҙмәт биржаһына барып эләгә. Ләкин бында бер мәлгә иғтибар итергә кәрәк: эш урыны ҡыҫҡартылыу йәки ойошма банкротҡа әйләнеү сәбәпле биржаға барып эләгеү менән унда урамдан, йәғни эшһеҙ статусында барып эләгеү араһында ҙур айырма бар һәм ул финанс яғынан ҡарағанда ла ниндәйҙер әһәмиәткә эйә.

Әйткәндәй, дәүләт эшһеҙ статусында ҡалған граждандарға үҙ ярҙамын күрһәтә: уларға эшһеҙлек буйынса пособие түләнә, эш урындары тәкдим ителә, икенсе профиль буйынса уҡытыу ҙа, квалификация күтәреү ҙә һ.б. саралар ҙа ҡаралған. Даими рәүештә вакансиялар йәрминкәһе уҙғарыла. Шулай уҡ ошо көндәрҙә беренсе тапҡыр Рәсәй төбәктәренең эш биреүселәре ҡатнашлығында вакансиялар йәрминкәһе ойошторыласаҡ. Әле илдең 60 төбәге менән хеҙмәттәшлек булдырылған.Әлбиттә, үҙ белдеген, үҙ юлың менән йәки кемгәлер эйәреп эш эҙләүгә ҡарағанда, бындай йәрминкәләрҙә эш табыуы күпкә еңелерәк. Икенсе яҡтан, был хеҙмәттәр бары тик дәүләт предприятиелары, йәғни гарантиялы эш биреүселәр менән генә хеҙмәттәшлек итә. Тимәк, эшең дә, ашың да буласаҡ.

**Земфира ХӘБИРОВА.**

АФАРИН!

# АҠЫЛЛЫ БАЛА...



## миҙаллы ла була

**Ошо көндәрҙә Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов баш ҡаланың урта белем биреү учреждениеларын алтын миҙалға тамамлаусы егеттәр, ҡыҙҙар һәм уларҙың ата-әсәләре менән осрашты. Ә быйыл Өфө мәктәптәрен тамамлаған 5645 уҡыусының 292-һе - алтын, 260-ы көмөш миҙалға лайыҡ булған.**

Тантаналы йыйылышты асып, Ирек Ялалов миҙалсыларға: "Йәш саҡтан үҙ эшен дөрөҫ ойоштора белгәндәргә оло тормошҡа аяҡ баҫҡас та еңелерәк буласаҡ. Һеҙҙең дә киләсәктә ҡалабыҙҙың етәкселәре, ҙур-ҙур эшҡыуарҙар, йәғни йәмғиәтебеҙ өсөн кәрәкле кешеләр булырығыҙға ышанам. Һеҙ - баш ҡалабыҙ ғорурлығы!" - тине. Артабан Ирек Ишмөхәмәт улы уҡыусыларының ошондай уңыштарға өлгәшеүенә туранан-тура йоғонто яһаған, улар менән көн һайын арымай-талмай эшләгән уҡытыусыларҙың тырышлығын билдәләне, лайыҡлы граждандар тәрбиәләгәне өсөн ата-әсәләргә лә рәхмәт һүҙҙәрен йәлләмәне.

Осрашыу һуңында Өфө сити-менеджеры баш ҡаланың бөгөнгө ҡаҙаныштары, донъя кимәлендәге уңыштары менән таныштырҙы. Ҡунаҡтар, үҙ сиратында, үҙҙәрен борсоған һорауҙар биреп, Ирек Ялалов менән осрашыуҙы уңышлы файҙаланып ҡалырға тырышты.

Был осрашыуға юллағанда, кемдер "Алтын миҙаллы булыуымдың фәтеүәһе бармы?" тигән һорау ҙа борсоған булғандыр, бәлки. Ни тиһәң дә, юғары уҡыу йортона инеү-инмәүгә көмөш, хатта алтын миҙаллы булыуың йоғонто яһамай бит хәҙер. Шулай ҙа төплө белем алыуҙың барыбер ҙә үҙ өҫтөнлөктәре барлығын тойҙо йәштәр. Быны бит, Өфө башлығы үҙе уларҙы баһаланы: "Ҡайҙа ғына уҡыһағыҙ ҙа, үҙегеҙҙең тыуған ерегеҙ, белем алған ҡалағыҙ тураһында һөйләй йөрөгөҙ, Рәсәйҙә генә түгел, донъяла ла иң яҡшы белем биргән төбәк тураһында белһендәр. Йәнә, баш ҡалабыҙ юғары квалификациялы йәш белгестәргә һәр ваҡыт ҡуш ҡуллап алырға әҙер, һеҙҙе һәр ваҡыт эшкә көтәбеҙ", - тине Ирек Ишмөхәмәт улы.

Баш ҡаланың 18-се мәктәбен быйыл ике ҡыҙ алтын миҙалға тамамлаған. Уларҙың береһе Ғәлиә Ғайсина, мәсәлән, икенсе йыл рәттән экология һәм биология буйынса бөтә Рәсәй олимпиадаларында беренсе урын яулаған. Бөгөнгө осрашыуҙан ул да бик ҡанатланып, дәртле артып сыҡты: "Күп таныштарҙы осраттым, яңы танышлыҡтар булдырҙым, Өфөлә алтын миҙаллы балалар бик күп икән, зал тулы булды бит", - тине Ғәлиә, тәьҫораттары менән уртаҡлашып. Ҡыҙ үҙенең киләсәктәге профессияһын теүәл фәндәр менән бәйләргә ниәтләй. Атаһына - физика-математика фәндәре докторы, профессор Әхтәр Мағаз улы Ғайсинға, шулай уҡ БДУ-ның математика факультетында уҡыусы ағаһы Рәшиткә оҡшарға теләй. Кем белә, бәлки, киләсәктә Ғәлиәнән дә бынамын тигән ғалимә сығыр әле.

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ЮЛДАР ҮҘӘККӘ ҮТТЕ

**Рәсәйҙә ике проблема бар, тиҙәр. Шуларҙың иң үҙәккә үткәне - юлдар. Ғәҙәттә, йәй барлыҡҡа килгән соҡор-саҡырҙарҙы "ямау" менән үтһә, көҙгө ямғырҙар менән юлдарға асфальт түшәү башлана. Башҡаса мөмкин түгел, сөнки был - Рәсәй... Уны аҡыл менән аңлап булмай...**

Баш ҡалала "Башҡортостан Республикаһының Өфө ҡала округын төҙөкләндереү буйынса заказсы һәм техник күҙәтеү хеҙмәте" юл-төҙөлөш лабораторияһы ойошторолоуы хаҡында күптәр хәбәрҙарҙыр. Әммә шулай ҙа бәгзеләр, ай-һай, тип шикләнеп, икеләнеп ҡарайҙыр. Ни тиһәң дә, был хеҙмәт Башҡортостан юлдарына түшәлгән асфальттың сифатын тикшереп, артабан ниндәй ойошма менән эшләү кәрәклеген асыҡлай. Ҡала округы хакимиәтенән белдереүҙәренсә, бынан һуң дәүләтебеҙ юлдарына бер миҙгел эсендә ярылған, соҡор-саҡырҙар әүерелгән асфальт һалынмаясаҡ. Ләкин подрядсылар тағы бер ҡанунды иҫенән сығармаҫҡа тейеш: юл-төҙөлөш өлкәһендәге тикшереү лаборатория эшмәкәрлеге менән генә сикләнмәй, ул юл төҙөлөшөнөң барлыҡ этаптарын үҙ эсенә ала. Сөнки хатта иң сифатлы асфальтты ла сифатһыҙ итеп түшәргә мөмкин. Әйткәндәй, бындай осраҡтар булғылап тора һәм уларға шунда уҡ кәртә ҡуйыла, подрядсыға эште ҡабаттан, сифатлы итеп башҡарырға тура килә. Ләкин ҡайһы бер подрядсылар материал сифатын яҡшыртырға ашыҡмай икән. Улар, күрәһең, юл-төҙөлөш эштәренең бары тик йәйге миҙгелдә генә атҡарылыуын һәм ваҡыт ҡыҫа башлаһа, материалдың сифатына иғтибар итеп тормай, күләм артынан ҡыуыуҙар башланырына өмөтләнә. Әммә ҡала округы хакимиәте лә артҡа сигенергә йыйынмай: юлдарға ҡаты ҡатлам түшәү буйынса махсуслашҡан предприятиелар өсөн ҡағыҙәләр ҙә, талаптар ҙа бер үк буласаҡ, тип белдерә.

Шулай итеп, Өфөлә юл-төҙөлөш эштәре артабан күп кимәлле - лабораторияла материал сифатын контролләүҙән алып, асфальтланған юлды ҡабул итеп алғанға тиклем - тикшереү системаһы аша үтеп кенә фәйҙаланыуға тапшырыласаҡ. Бәлки, шул ваҡытта Рәсәйҙең бер проблемаһы юҡҡа сығыр...

# ХАЛЫҠ ФЕКЕРЕ: ЭЙЕМЕ, ЮҠМЫ?

**Өфө ҡала округы хакимиәте һорауы буйынса "Социомаркет" тикшеренеүҙәр үҙәге тарафынан тиҙ йөрөшлө трамвай линияһын төҙөүгә ҡарата халыҡтың фекерен белешеү үткәрелгән.**

Тикшереү барышында ҡала урамдарында барлығы 700 кешенән һорауға яуап алына. Уларҙың 71,9 процен-

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡорт дәүләт университетының иҡтисад факультеты Иҡтисад, финанс һәм бизнес институты итеп үҙгәртелде, тип хәбәр иттеләр юғары уҡыу йортонОң матбуғат үҙәгенән. Институт составында һигеҙ кафедра, шулай уҡ төбәктәрҙең социаль-иҡтисади мәсьәләләрен тикшереү лабораторияһы, ғилми-мәғлүмәт секторы, уҡытыу бүлектәре һәм башҡа бүлексәләр бар. Иҡтисад, финанс һәм бизнес институты директоры итеп иҡтисад фәндәре кандидаты, доцент Рөстәм Ахунов тәғәйенләнде.

✓Һиндостандың Рәсәй Федерацияһындағы илселегендә Башҡортостандың презентацияһы үтте. Унда республиканың иҡтисади, инвестицион һәм сәнәғәт мөмкинлектәре тәкдим ителде. Республика исеменән БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Салауат Сәғитов, Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов, шулай уҡ төбәктең ҙур предприятиелары вәкилдәре сығыш яһаны.Осрашыуҙа Һиндостан Республикаһының Рәсәйҙәге Ғәҙәттән тыш һәм Тулы хоҡуҡлы вәкиле Аджай Малхотра, Һиндостандың ҙур предприятиелары вәкилдәре, дәүләт структуралары етәкселәре ҡатнашты.

✓2015 йылда Сибай ҡалаһының нигеҙ һалыныуына 60 йыл тула. Ошо ваҡиға айҡанлы ҡалала энциклопедия нәшер итеү буйынса эш башланған. Был эшкә "Башҡорт энциклопедияһы" ғилми-нәшриәт комплексы ла йәлеп ителгән. Эш төркөмө ултырыштарында китапҡа индереләсәк темалар исемлеге әҙерләнгән. Ҡалала йәшәгән һәр кеше үҙ тәкдимдәрен индерә ала. Барлыҡ материалдар редакция коллегияһы һәм эш төркөмө ултырыштарында тикшереләсәк. Тәкдимдәрҙе ҡала округы хакимиәтенә йәки "энциклопедия өсөн" билдәһе менән admin_sibai07@mail.ru адресына ебәрергә мөмкин.

✓Фәйзи Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле яңы миҙгелгә премьералар әҙерләй. Бейеүселәр коллективтың художество советына алты постановка тәкдим итте. Улар араһында: рус бейеүе "Калинка" (ҡуйыусыһы - Һамарҙан Алексей Шишкин), ир-егеттәр башҡорт бейеүе "Ете ырыу" (хореографы - Рәйес Низаметдинов), башҡорт бейеүе "Икмәккә мәҙхиә" (ҡуйыусыһы - Марат Кәримов), тергеҙелгән бейеү "Башкорт краковяғы", "Коралай" һәм шаян бейеү "Әтәс" (хореографы - Риф Ғәбитов). Әйткәндәй, Риф Ғәбитов һүҙҙәренсә, яңы иждад миҙгеленә ул 10 бейеү ҡуйырға ниәтләй.

*✓ Коммуналь түләүҙәр буйынса бурысы булмаған граждандар Субсидиялар биреү үҙәгенең структура бүлексәләренә ғариза һәм документтар менән мөрәжәғәт итә ала. Түләүҙәр бары тик 2013 йыл өсөн генә биреләсәк.*



*ХОҠУҒЫҢДЫ БЕЛ!*

**Торлаҡ-коммуналь хужалығы (ТКХ) бөгөн иң бәхәсле һәм иң баш ҡатырғыс өлкәләрҙең береһе булып торалыр, моғайын. Сөнки был тармаҡты тегеләй ҙә, былай ҙа борғолайҙар, әммә бер көн килеп ябай халыҡ үҙе өҫтәл артына ултырып ҡулланған хеҙмәттәр өсөн түләүҙәргә ревизия яһай башлаһа, кеҫәһендәге тиндәрҙең шылтырамай, тауышланмай ғына төрлө атамалар артына ышыҡланып, коммуналь хеҙмәт күрһәтеүсе төрлө ойошмаларҙың аҡса янсығына күскәне асыҡлана. Шау-шыу тыуа, тикшереүҙәр китә һәм күпмелер ваҡыттан һуң ҡабат матур ғына итеп алдауҙар, алдашыуҙар башлана...**

# ТҮЛӘ ЛӘ...



## кире ҡайтарып ал!

Шундай күренештәр фонында баш ҡалала "Граждандарҙың коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүен көйләү тураһында"ғы федераль закон проекты сиктәрендә эксперттар ТКХ-ның үҫеш перспективалары буйынса фекер алышты. РФ Хөкүмәте ҡарамағындағы ТКХ-ны үҫтереү буйынса Эксперт советының эшсе төркөмө вәкиле Екатерина Тетушкина тармаҡтағы төп үҙгәрештәр хаҡында бәйән итте. Төп яңылыҡ булып ҡулланыусылар хоҡуғын яҡлау маҡсатында ҡайһы бер процедураларҙың, атап әйткәндә, иҫәп приборҙарының күрһәткестәрен алыу; тейешле сифатлы коммуналь хеҙмәт күрһәтмәү фактын теркәү; теркәлмәгән граждандарҙың иҫәбен алыуҙа үҙгәрештәр булыуын белдерҙе. Шулай уҡ дөйөм йорт ихтыяжына (ОДН) файҙаланылған коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләү тәртибе лә, шул иҫәптән ҡулланыу нормативын иҫәпләү тәртибе лә үҙгәрә. Әгәр күп фатирлы йорт иҫәп ҡулланмалары менән йыһазландырылған икән, ОДН өсөн нормативтан тыш ҡулланылған хеҙмәттәргә 1 июлдән башлап идара итеү ойошмаһы түләйәсәк. Мәҫәлән, дөйөм йорт ихтыяжына күрһәтелгән һәм ҡулланыусылар араһында бүленгән коммуналь хеҙмәт күләме ошо ихтыяж өсөн билдәләнгән нормативтарҙан артып китергә тейеш түгел. Милекселәрҙең дөйөм йыйылышы ҡарарына ярашлы, коммуналь хеҙмәттәрҙе ҡулланыу күләме артҡан осраҡта, ул һәр торлаҡ һәм торлаҡ булмаған бинаның дөйөм майҙанына пропорциональ рәүештә бүленә. Әгәр бындай ҡарар ҡабул ителмәгән икән, башҡарма орган айырманы үҙе түләргә тейеш була.

Мәғлүм булыуынса, 1 июлдән тағы ла коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүҙәр артасаҡ. Ошо йәһәттән, федераль стандарттар, әгәр ғаиләнең дөйөм айлыҡ килеменән сығымдар ТКХ хеҙмәттәре өсөн түләүгә 22 проценттан ашып китә икән, уларға субсидиялар биреүҙе күҙаллай. Субсидия алыуға дәүләт һәм муниципаль торлаҡ фондында булған йорттарҙа йәшәүселәр; шәхси торлаҡ фондына ҡараған фондтан ҡуртым килешеүе буйынса торлаҡ алып йәшәүселәр; торлаҡ кооперативтары ағзалары; үҙ торлағына эйә булыусылар хоҡуҡлы.

Әйткәндәй, Башҡортостан Хөкүмәте республика халҡы өсөн өҫтәмә ярҙам мөмкинлеген дә булдырҙы - ул адреслы социаль түләүҙәр. БР Хөкүмәтенең ағымдағы йылдың 22 мартында ҡабул ителгән 98-се ҡарарына ярашлы, әгәр граждандарҙың коммуналь хеҙмәттәр өсөн дөйөм түләүе уларға иҡтисади нигеҙләнгән тарифтар индереү һөҙөмтәһендә уртаса Башҡортостан Республикаһы буйынса билдәләнгән тарифтарҙың үҫеү кимәленең юғары сиген үтә икән, бындай граждандарға адреслы социаль ярҙам бирелергә тейеш. Был ярҙамды алыу өсөн йәшәгән урын буйынса ғариза яҙырға кәрәк. Бында торлаҡ ниндәй фондҡа ҡарағанлығы иҫәпкә алынмай. Шулай уҡ граждандың ЕДК - бер тапҡыр бирелгән компенсацияны алыу-алмауы ла мөһим түгел, ғаилә ағзаларының килеме лә иҫәпкә алынмай, әммә тарифтарҙың үҫеше 12 проценттан артырға тейеш түгел. Бөгөн республика буйынса адреслы социаль түләүҙәр (АСВ) күләме уртаса 62 һум 25 тин тәшкил итә. Коммуналь түләүҙәр буйынса бурысы булмаған граждандар Субсидиялар биреү үҙәгенең структура бүлексәләренә ғариза һәм документтар менән мөрәжәғәт итә ала. Түләүҙәр бары тик 2013 йыл өсөн генә биреләсәк. Әле Үҙәккә 30 меңдән ашыу граждан мөрәжәғәт иткән. АСВ алыу өсөн Үҙәктең район-ара филиалдарына шәхси иҫәп һәм кредит учреждениеһының атамаһы күрһәтелгән ғариза, Рәсәй Федерацияһы гражданины паспортының күсермәһе, торлаҡ бина менән файҙаланыуға хоҡуҡты раҫлаған документтың күсермәһен (әгәр күсермә нотариуста раҫланмаһа, уның төп нөсхәһен күрһәтеү ҙә етә) тапшырырға кәрәк.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

---

ты Блюхер урамы буйлап Дәүләт циркынан Ҡала мәҙәниәт һарайына тиклем бындай транспорт линияһының төҙөлөүен хуплауын белдерә.

Әлеге ваҡытта Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми-тикшеренеүҙәр үҙәгенең Социаль-иҡтисади тикшеренеүҙәр институты белгестәре тарафынан икенсе социологик һорау алыу тамамлана. Был учреждение 1200 өфөлөнөң фекерен белешкән. Һорау алыуҙарҙың төрлө ысулдарын ҡулланыу көн үҙәгендә торған мәсьәлә буйынса барлыҡҡа килгән йәмғәт фекерен объектив сағылдырырға мөмкинлек бирәсәк. Һөҙөмтәләр менән баш ҡала округы хакимиәте сайтында танышырға мөмкин буласаҡ.

## ИҪКЕ ЯҢЫ СКВЕР

**Яҡын киләсәктә Пушкин урамында урынлашҡан (Ленин урамынан Карл Маркс урамына тиклем Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры эргәһендәге) һәм халыҡ телендә "Пушкин аллеяһы" тип йөрөтөлгән билдәле ял итеү урыны үҙенең исемен дә, есемен дә үҙгәртмәксе.**

1949 йылда бында шағирҙың бюсы торған һәм ул тимер рәшәткәләр менән уратылып алынған булған. Ә бөгөн театрҙан беҙгә билдәле яҡташыбыҙ Рудольф Нуреев "ҡарап тора". Шуға күрә аллеяның исемен үҙгәртеү зарурлығы килеп тыуған да инде. Бындай идеяны зыялылар, мәҙәниәт һәм сәнғәт эшмәкәрҙәре тәҡдим иткән. Сквер йыл дауамында ремонтланасаҡ, төҙөкләндереләсәк, матур эскәмйәләр урынлаштырыласаҡ, фонарҙар ҡуйыласаҡ һәм ингән урында скверҙың исеме яҙылған арка урынлаштырыласаҡ.

**Шәрифә САЛАУАТОВА әҙерләне.**

---

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

## ҮҘЕҢДӘН ТОРА...

**Бөгөн һәр кемдең кеҫәһендә кәмендә бер банк картаһы бар, ә ҡайһы берәүҙәрҙә иһә уларҙың һаны күпкә артыҡ. Ҡулаҡса алып йөрөмәү хәүефһеҙ күренһә лә, картала һаҡланған аҡсаларҙың да юғалыу ҡурҡынысы бар. Банктар ниндәй генә һаҡланыу саралары уйлап тапһа ла, мутлашыусылар юғалып ҡалмай һәм көндән-көн үҙҙәренең енәйәт "оҫталығын" камиллаштыра.**

Бынан бер-нисә йыл элек карта хужалары өсөн иң хәүефлеһе (62,6 процент) - картаны юғалтыу, унан һуң ғына законһыҙ рәүештә иҫәптән аҡса алыу (36,8 процент) һаналһа, бөгөн хәл киреһенсә, йәғни картанан аҡса юғалыу осраҡтары тәүге урынға сыҡты. Һуңғы ваҡытта бындай осраҡтарҙың һаны 54,6 процентҡа етте. Карта хужаларының үҙ мөлкәтенә иғтибарлыраҡ була башлауы иһә банк карталарының юғалыу һанын күпкә кәметкән. Карталар менән бәйле енәйәттәр исемлегендә банкоматта аҡса алған ваҡытта карта хужаларын талау осрағы ла бар. Шулай уҡ аҡса урлауҙың иң таралған ысулы булып скимминг тора. Скимминг банк картаһының магнит һыҙығындағы мәғлүмәтте һәм пин-кодты уҡыу өсөн банкоматҡа махсус ҡоролма урынлаштырыуға ҡайтып ҡала. Мутлашыусылар был мәғлүмәтте ҡулланып, ялған банк карталары эшләй һәм иҫәптән аҡса урлай. Банкоматта аҡса алыусының пин-кодын иҫләп ҡалыу һәм артабан уның банк картаһын урлау ҙа шулай уҡ үҙ "актуаллеген" юғалтмай.

Иҫәбенән аҡса юғалған карта хужаһының банкка аҡсаһын ҡайтарыу мәсьәләһе менән мөрәжәғәт итеүе уңыш килтермәйәсәк, сөнки аҡса банкоматтан пин-кодты ҡулланып, йәғни законлы рәүештә алынған, тимәк, бар яуаплылыҡ карта хужаһының иңендә ята. Шуға күрә карта менән бик һаҡ ҡулланырға кәрәклеге хаҡында бер ҡасан да онотмағыҙ, тип иҫкәртә банктар.

## УРТАСА ЯРЛЫЛАР

**Теге йәки был төбәктә йәшәүсе ғаиләләрҙең йәшәү кимәле ниндәй? Был һорауға яуапты Рейтинг РИА белгестәре төҙөгән рейтингта күрергә була. Тикшереү барышында улар Рәсәйҙең төрлө төбәгендә көн күргән һәм ике йәки өс бала тәрбиәләгән ғаиләләрҙең йәшәү кимәлен өйрәнгән. Бының өсөн белгестәр ғаиләләге ике оло кешенең уртаса айлыҡ эш хаҡынан ғаилә ағзаларына тотонолған минималь сығымдарҙы алып ташлаған һәм ҡулланыуҙа ҡалған "ирекле" аҡсаларҙың иҫәбен сығарған.**

Тикшереүҙәрҙән асыҡланыуынса, барлыҡ сығымдарҙан һуң, Рәсәйҙә йәшәүсе һәм ике бала тәрбиәләүсе ғаиләләрҙә уртаса 27 мең һум, ә өс балалы ғаиләләрҙә 20 меңдән әҙ генә күберәк ирекле аҡса ҡала. Башҡортостан был рейтингта ни бары 40-сы урынды биләй: беҙҙең төбәктә ике балалы ғаиләгә 17,8 мең һум, ә өс балалы ғаиләгә 12,3 мең һум тура килә. Ә, мәҫәлән, Ямал-Ненец автономиялы округында был һандар, ярашлы рәүештә, 86 һәм 76 мең һум, Чукоткала - 77 һәм 65,5 мең һум, ә Төмән өлкәһендә 69 һәм 63 мең һум тәшкил итә.

Ҡайһы бер күрше төбәктәрҙә хәлдәр беҙгә ҡарағанда яҡшыраҡ. Мәҫәлән, Татарстан был исемлектең 22-се, Свердловск өлкәһе 24-се, ә Силәбе өлкәһе 29-сы урынында. Ә Пермь крайы, Ырымбур һәм Һамар өлкәләре, киреһенсә, Башҡортостандан түбәнерәк урын биләй. Ләкин иң мөшкөл хәл Дағстанда (ярашлы рәүештә 6925 һәм 1960 һум), Мордовияла (6735 һәм 1401 һум) һәм Алтай крайында (6736 һәм 740 һум).

---

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Баҙам биҙе шешеүе

❖ Ауыҙ ҡыуышлығын бал иретелгән һыу менән сайҡатыу баҙам биҙенең (миндалина) шешеүен бөтөрә, бынан тыш, тештәрҙе лә ағарта. Бының өсөн бер стакан йылы һыуға 1 ҡалаҡ бал алырға кәрәк.

### Гайморит

❖ 2 ҡалаҡ етен орлоғона ярты литр һөт ҡойоп, талғын утта 10 минут ҡайнатырға. Һыуынғансы ошо төнәтмәнең быуында тын алырға. Гаймориттан дауаланыу өсөн етен орлоҡтарын табала йылытып, сепрәк туҡымаға һалып, уның менән танау һәм маңлайҙағы гайморит ҡыуышлығын йылытырға. Был сараларҙы көнөнә өс тапҡыр эшләргә кәрәк. Бер үк ваҡытта дегәнәк һабағынан әле генә һығылған һутты танауға тамыҙырға.

### Герпес

❖ Ирендәге герпес. Бәйғәмбәр тырнағы (календула) төнәтмәһенә манылған тампонды яраға һалырға. Алкоголгә йәки уҫаҡ ҡайыры төнәтмәһенә манылған сәй пакеты ла ярай. Боҙ һалыу файҙалы. Яраға Е витамины, вазелин, цинк майы һөртөргә була.

### Диатез

❖ Әгәр ҙә сабыйығыҙ диатездан яфалана икән, уға картуф крахмалы ваннаһы ярҙам итәсәк. Һыуҙың температураһы 37 градус булһын. 100 грамм крахмалды бүлмә температураһындағы һыу ҡушып иҙәһең һәм ванналағы һыуға өҫтәйһең (100 грамм крахмал - 10 литр һыуға). Баланы 10-15 минутҡа ваннаға ултыртаһың, һуңынан уны простыняға урап, ятҡырып тораһың. Тәнен таҫтамал менән һөртмәгеҙ.

❖ Төнгөлөккә баланы һалҡын һыу менән ҡойондороғоҙ. Организмдың үҙен яҡлау механизмы баланы был яфанан да ҡотҡарасаҡ.

### Дисбактериоз

❖ 0,5 литр йылымыс һыуға 1 ҡалаҡ бал һәм 1 ҡалаҡ шәкәр, 2 грамм сүпрә һалып, сәғәт ярым йылы урында тоторға. Уны бер юлы ашар алдынан 3-4 сәғәт алда эсергә. Бер тапҡырҙан ярҙам итмәһә, 2-3 көндән тағы ҡабатларға.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

*✓ Әгәр ҙә кеше дөрөҫ юлдан бара икән, ул һәр ваҡыт бәхетле. Бәхет - ул һуңғы һөҙөмтә түгел, ул юл, тип әйтергә була. Кеше дөрөҫ юлдан барһа, гел бәхетле була, эшенән дә үҫеш, ҡәнәғәтлек таба.*



БАҠЫЙ БЫУАТ ЙОЛАҺЫ

# БАШҠОРТТАРҘЫҢ... дауалау һәм ҡурсалау магияһы

## Йыланғараҡты имләү

**Ысыҡ менән йыуыу.** Йыланғарак сыҡҡан ерҙе ысыҡ менән йыуалар. Уны шулай атҡарғандар:

- Ни булған?
- Йыланғараҡ булған!
- Ни булған?
- Йыланғараҡ булған!
- Ни булған?
- Йыланғараҡ булған!

- тип өс тапҡыр ысыҡлы устың һырты менән күҙҙе йыуғандар.

**Йылаи тиреһе име.** Йылан тиреһен өшкөрөп һалһаң да күҙ ауырыуы бөтә. Йыландың ҡабығын яҙ көнө йылан өңөнән "сисенеп" сыҡҡас, һалып өлгөрмәһә, һыҙырып та алғандар. Уны кеше күҙенә күрһәтмәй генә алып ҡайтып, өшкөрөп, йәшереп тотҡандар.

**Миңһеҙ йылан ите име.** Йыланғарак булһа, миңһеҙ йыланды бешереп, шунын боҫона ауырыу күҙҙе тоторға кәрәк. Ауырыу бермә-бер бөтә, тиҙәр.

**Күҙ теле.** "Йылан күҙе" тигән ауырыу бар. Ул сүп, бысҡы аламаһы кергәндә барлыҡҡа килә. Йылан күҙе булһа, тел менән сүпте алғандар, доға уҡып өшкөргәндәр. Тәүҙә "Әлхәм"де, унан "Әбжәт"те, "Ҡолһоуалла" ны уҡыйҙар.

**Кирегә һанау име.**

Арпа сыҡҡан күҙемә,

Мәмләкен мә, күкеш, тиҙәр. Шунан һуң кирегә һанап, һамаҡлап, ботаҡҡа төртәләр:

10, 9, 8, 7, 6,5, 4, 3, 2, 1,
Бер - берҙән ҡайт, Ай ҙа ҡайта,
Көн дә ҡайта,
Һин дә ҡайт,
Елдән килһәң, елгә кит,
Һыуҙан килһәң, һыуға кит,
Ҡайҙан килдең, шунда кит,
Тфү, тфү, тфү!

**Өшкөртөлгән арпа менән имләү.** Күҙгә арпа сыҡһа, ете бөртөк эшкәртелгән арпа менән төрткөләйҙәр, шунан уны төкөрөп быраҡтыралар. Бик тә арпа булмаһа, берәй ир кешенең күлдәк яғаһы менән ете мәртәбә "арпа телен" уҡып төртәһең.

**Арпаны ҡул менән имләү.** Күҙеңә арпа сыҡһа:

Арпа, мәлек, мәмәлек,
Арпа, күкеш, мә, күкеш! - тип әйтәһең дә һул ҡулың менән төртәһең.

**Арпа әпсендәре.**

Ни имләйһең? Арпа имләйем.
Ни имләйһең?Арпа имләйем.
Ни имләйһең? Арпа имләйем.
Ни төртәһең? Арпа төртәм-
Бир тоттом, ай ҙа ҡайта,
Көн дә ҡайта, һин дә ҡайт -
Кит! Кит!
Арпа-мәлек, мәмәлек
Бына һиңә биш күкеш -
Тфү, тфү, тфү!
Арпа һуҡыр, мин дә һуҡыр
Ҡайҙан килһәң, шунда ҡайт!
Көндән килһәң, көнгә ҡайт!
Айҙан килһәң, айға ҡайт,
Арпа-мәлек, мәмәлек,
Бына һиңә бер күкеш,
Ун, туғыҙ, һигеҙ,
Ете, алты, биш, дүрт,
Өс, ике, бер, күкеш!
Тфү, тфү, тфү...
Әпсен, төпсөн
Минән китһен,
Айға күсһен,
Шунда үҫһен!
Әпсен, төпсөн, тиҙерәк бөтһөн! Тфү!

**Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВА.**
**(Дауамы бар).**

ПСИХОЛОГ ЫҢҒАЙҒА КӨЙЛӘЙ

**Тотороҡло билдәлелек хәлендә йәшәүе рәхәт - артыҡ тырышырға, артыҡ борсолорға, хатта алға хәрәкәт итергә лә кәрәкмәй. Бары тик үҙең өйрәнгән ошо комфорт мөхиттә йәшәп, унан ҡәнәғәтлек алырға һәм буш ваҡытыңды ниндәйҙер ваҡиғалар, әйтәйек, дуҫтар менән осрашыуҙарға сарыф итергә генә ҡала кеүек. Әммә белгестәр кәңәш итеүенсә, был уңайлы мөхиттән ваҡыты-ваҡыты менән сығып алырға кәрәк, юғиһә, һинең үҫешең туҡтаясаҡ.**
**Комфорт мөхитенән сығыуҙа, әлбиттә, үҙенә күрә хәүеф тә бар - билдәһеҙлек үҙенең билдәһеҙлеге менән ҡурҡыта. Әллә, киреһенсә, билдәһеҙлектән түгел, тормошоңдоң билдәле бер юлдан ғына тәгәрәүенән ҡурҡырға кәрәкме? Ни өсөн халҡыбыҙҙа ҡапыл ҡарар ҡабул итеү тойғоһо үҫешмәгән? Ошо һорауҙарға психоаналитик, Башҡорт дәүләт университетының психология факультеты уҡытыусыһы Әлфиә Сәғит ҡыҙы БАЙРАМҒОЛОВА менән яуап эҙләйбеҙ.**

# ЯНДЫРАЙ ТҮГЕЛҺЕҢМЕ?

## Улайһа яңылыш аҙым яһамаҫһың



- Комфорт мөхитенән сығыу кәрәклеге - психологтар кәңәше генә түгел, ә тәбиғәт законы, һәр кешенең эске ихтыяжы. Әгәр ҙә һеҙҙең өлгәшкән уңыштарығыҙ тотороҡлоҡ һәм хәүефһеҙлек кенә килтерә икән, уларҙың баһаһы ла көндән-көн түбәнәйә генә барасаҡ. Былдай тормош иртәме-һуңмы ҡәнәғәтһеҙлек тойғолары уятасаҡ, әммә нимәнелер үҙгәртергә хәл иткәндән һуң барлыҡҡа килгән билдәһеҙлектән ҡурҡып, ошо үҙегеҙгә уңайлы булған комфорт мөхитендә ғүмерегеҙҙең аҙағына тиклем ултырыуығыҙ ҙа ихтимал. Шуға ла тәүҙә үҙеңдәге ҡурҡыу тойғоһон еңергә кәрәк.

Кеше ни өсөн нимәнелер үҙгәртеүҙән ҡурҡа һуң? Өйрәнгән мөхиттән саҡ ҡына ситкә сыҡһа, уға ысынлап та ҡыйын, сөнки күп нәмәне яңынан башларға тура килә. Быға тиклем алған белеме, тәжрибәһе етерлек тә һымаҡ, тик яңы мөхиттә улар иҫкергән булып сыға, бөтәһен дә яңынан эшләргә - белем алырға, тәжрибәне өйрәнергә кәрәк. Бәлки, кешене былар ҙа ҡурҡытмайҙыр. Ғәҙәттә, кешене яңы кешеләр менән аралашыу ҡурҡыта, сөнки һинең аралашыу даирәң дә үҙгәрә. Тик шуны ла хәтерҙә тотоғоҙ: яңылыҡтан, үҙгәрештәрҙән ҡурҡмағанда ғына уңышлы кеше булырға мөмкин. Уңышлы кешеләр менән күберәк аралашығыҙ - уңышҡа өйрәтеүсе, уңышҡа көйләүсе психологияның нигеҙендә лә ошо ята. Улар диңгеҙҙә ҡолас йәйеп, йөҙөп китергә һәләтле, яңылыҡтан ҡурмай торған кешеләр.

Тормошоң, эшең менән ҡәнәғәт түгелһең, әммә уны үҙгәртеү эске көсөргәнешкә килтерер, тип ҡурҡаһыңмы? Йәмғиәттә стресты ниндәйҙер кире төшөнсә, ул сәләмәтлеккә зыян килтерә, тип ҡабул итәләр. Тик стресс - кешегә шулай уҡ кәрәкле хәл-торош. Ул тышҡы һәм эске кире тәьҫирҙәргә ҡаршы организмда барлыҡҡа килгән көсөргәнешле һаҡланыу сараһы.

Ғалимдар кешеләрҙе һәм йәнлектәрҙе бер стресһыҙ мөхиткә урынлаштырып ҡараған. Баҡтиһәң, кеше ошо тыныс хәлдә оҙаҡ булһа, йә аҡылдан яҙа, йә үҙен был мөхиттән сығарыуҙы һорай башлай икән. Әгәр ҙә мейегә бер яңы мәғлүмәт тә килмәһә, был кеше өсөн үлемгә тиң. Шуға ла тәү ҡарашҡа күнегелгән тыныс тормошобоҙҙо үҙгәртеү беҙҙе ниндәйҙер көсөргәнешкә ҡуя икән, бының артыҡ зыяны юҡ. Тәбиғәт үҙе беҙҙе быға көйләгән. Тормошто үҙгәртеү стресҡа килтерһә лә, тик тороу торғонлоҡҡа илтә. "Ятҡан таш мүкләнә, йөрөгән таш шымара", ти халыҡ мәҡәле. Шуға ла ҡурҡыуҙарҙы артҡа ҡуйып, тәүәккәлләргә кәрәк.

Шул уҡ ваҡытта, тормошоң менән ҡәнәғәт булмай йәшәү ҙә кешене стресҡа индереүе бар бит, ә был психосоматик ауырыуҙарға, мәҫәлән, ҡурылдай, астма, ашҡаҙан сирҙәренә килтерә. Әйтәйек, нимәнәндер ҡурҡаһың икән, тын ҡыҫыла башлай. Тын ҡыҫылыу астмаға килтерә. Был сир бәләкәй балаларҙа осраһа, тимәк, әсәһе ниндәйҙер проблемалары, эске ҡыҫымдары өҫтөндә ваҡытында эшләмәгән.

Ғөмүмән, башҡорт халҡының яндырай булмауы, ҡапыл киҫкен ҡарарҙар ҡабул итмәүен ыңғай күренеш тип ҡарарға кәрәк. Холҡоноң был сифаты уны яңылыш, ҡабалан аҙымдарҙан, тимәк, стрестан да һаҡлай. Сөнки ул тәбиғәт балаһы. Тәбиғәттә ҡабаланыу, өтәләнеү юҡ, яҙ ҙа, йәй ҙә үҙенең мәле еткәс кенә килә. Тормошта ла шулай, бөтөн нәмә үҙенең ваҡытында эшләнә. Әгәр мәле етмәгән икән, тыпырсынып алға ынтылыу, сабырһыҙланыу ҙа ярҙам итмәй. Бер нәмә лә ҡапыл ғына килеп сыҡмай, уның ана шул мәле етеүе фарыз. Башҡорт ҡапыл байығыуҙы ла өнәп етмәй, хис-тойғоларҙың үтә ҡыҙыу булыуынан да шикләнә. Эске тойомлауға таянып, ҡабалан аҙымдар яһамауы - беҙҙең психологияның бик күркәм яғы ул. Заман ҡатмарлыраҡ булған һайын, мәғлүмәт тә, төрлө тәҡдимдәр ҙә күп. Әйтәйек, хәҙер селтәрле маркетинг менән шөғөлләнергә тәҡдим итеүселәр аҙым һайын осрап тора. Башҡорттоң быға һағайып ҡарауы уны яңылышлыҡтарҙан һаҡлай ҙа инде, ваҡытын да буш менән булышыуға тотонмай, матди яҡтан да юғалтыу кисермәй. Диндең дә йоғонтоһо бар, барына риза булырға һәм булғанын һаҡларға, тигән тәрбиә шулай уҡ бала саҡтан һалынған. Ә үҙенең ҡулынан килгәнде эшләргә, үҙе белгән шөғөл менән булышырға башҡорт кешеһе бер ваҡытта ла ҡурҡмай.

Һәр кешенең үҙенең тиҙлеге, маҡсаты, юлы бар. Әгәр ҙә ысынлап та тормошта яңылыҡтар, рухи үҫеш булмауын һиҙеп ҡалһағыҙ, тимәк, яңы аҙымдар яһарға ваҡыт еткән. Тимәк, һеҙ эстән яңылыҡтарға әҙерһегеҙ. Нисек кенә булмаһын, тормоштоң һәр бөгөлөн беҙ аңыбыҙҙа үҙебеҙ планлаштырабыҙ. Иғтибар итһәгеҙ, беҙҙе уратып алған һәр нәмә, һәр ваҡиға тураһында беҙ ҡасандыр хыялланғанбыҙ, әммә ул тормошобоҙға беҙ әҙер булғас ҡына килеп инә.

Әгәр ҙә кеше дөрөҫ юлдан бара икән, ул һәр ваҡыт бәхетле. Бәхет - ул һуңғы һөҙөмтә түгел, ул юл, тип әйтергә була. Кеше дөрөҫ юлдан барһа, гел бәхетле була, эшенән дә үҫеш, ҡәнәғәтлек таба. Ә был юл ҡәнәғәтлек килтермәй икән, тимәк, һин дөрөҫ юлда түгелһең. Шуға ла барлыҡ ҡурҡыуҙарҙы ташлап, бәхеткә илтеүсе юлды табырға тырышығыҙ, шул саҡта бәхетле булырһығыҙ.

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**яҙып алды.**

***✓ Улар боронғо ҡалалар булып тора, урамдары түңәрәк итеп планлаштырылған һәм ҡәлғә диуарҙары булған был ҡалалар хәҙер Арҡайым, Һынташ, Ольгино, Устье һ.б. (барлығы ике тиҫтәгә яҡын) тип атала.***



ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# "УРАЛ БАТЫР" ЭПОСЫ ҺӘМ...

## Боронғо Греция мифтары араһында ниндәй уртаҡлыҡ бар?



Абаш мәҙәниәтен йөрөтөүселәр Уралға көнбайыштан, Волга буйынан килгән. Әммә уларҙың көнсығышҡа миграцияһы Урал аръяғында туҡтап ҡала. Күрәһең, был климаттың һәм тәбиғи ландшафттың үҙгәреүенә бәйлелер. Йылы эҙләп, улар көньяҡҡа йүнәлә һәм үҙҙәре менән зороастризмдың ғөрөф-ғәҙәттәрен дә алып китә. Археологтар арийҙарҙың, Абаш мәҙәниәте вәкилдәренең Уралдан китеүен бында үҙенсәлекле ерләү йолаһының юғалыуына бәйләй. К.В. Сальников: "Абаш һәйкәлдәре материалдары иҫбатлай, "бурасылар" (срубники) һәм Абаш халҡының бергә килешеп йәшәүе оҙаҡ дауам итә алмай. Абаштар Башҡортостандан китергә мәжбүр була", - тип яҙа. Улар Яйыҡ буйлап түбәнгә, Каспий диңгеҙенең ярҙарына китә һәм Урта Азия буйлап тарала. Зороастризмдың ерләү йолаһы эҙҙәре артабан көньяҡҡа йүнәлә һәм боронғо грек географы һәм тарихсыһы Страбон тарафынан Каспий диңгеҙенең көньяҡ ярында йәшәгән, үҙҙәрен каспийҙар тип атаған халыҡ араһында осрауы билдәләнә.

Абаштарҙың китеүе башҡорттарҙың боронғо ата-бабалары тарафынан "Урал батыр" эпосында ла теркәлә:

*Тау буйҙары йәшәрһен,*
*Мәңге үлмәҫ төҫ алһын,*
*Ҡошо һайрап маҡтаған,*
*Халҡы йырлап хуплаған,*
*Ерҙән ҡаҫҡан дошмандар*
*Бары күреп һаҡлаған,*
*Илһөйәргә ил булып,*
*Ерһөйәргә бағ булып,*
*Дошман күҙен ҡыҙҙырып*
*Балҡып торған ер булһын!*

Был сәскә атыусы ил археологтар тарафынан Яйыҡтың һул ярында табыла һәм шартлы рәүештә "Калалар иле" тигән исем ала. Бөгөн улар боронғо ҡалалар булып тора, урамдары түңәрәк итеп планлаштырылған һәм ҡәлғә диуарҙары булған был ҡалалар хәҙер Арҡайым, Һынташ, Ольгино, Устье һ.б. (барлығы ике тиҫтәгә яҡын) тип атала. Археологтар уларҙы Һынташ мәҙәниәте тигән атама аҫтында айыра.

Шуныһы ҡыҙыҡлы, боронғо башҡорттарҙың Урал тауҙарынан арий-абаштарҙың күпселек өлөшө киткәндән һуң ҡалған сәскә атҡан иле башҡа боронғо авторҙар тарафынан да билдәләнгән. Был хаҡта В. Татищев үҙенең "Рәсәй тарихы"нда боронғо грек шағиры Пиндарға (беҙҙең эраға тиклем VI-V быуаттар) һәм XV быуатта уның авторлығында донъя күргән "Лексикон о лицах и народах" тигән баҫма авторы Свидасҡа (IX быуат аҙағы - X быуат башы) һылтанма яһай. Пиндарҙың һәм Свидастың һүҙҙәренсә, гиперборей, төньяҡ скифтар, башҡорттарҙың боронғо ата-бабалары үҙҙәренең боронғо халыҡ булыуына дәғүә иткән һәм "барлыҡ халыҡтың атаһы, эллиндарҙың Тәңреһе - Уранусы уларҙың беренсе батшаһы булған" тип раҫлаған.

Ул боронғо гректар өсөн Уранус булған, ә башҡорттарҙың боронғо ата-олаталары өсөн - беҙҙең Урал батыр. Әлбиттә, исемде яҙғанда ошо мәғлүмәт авторҙарының боронғо грек сығышлы булыуы ла үҙ йоғонтоһон яһаған. Әммә башҡорт эпосындағы кеүек, уларҙың һүҙенән боронғо башҡорттарҙың Урал батырҙы Тәңре кеүек күреүе аңлашыла. Ул арий-абаштар киткәндән һуң улар өсөн беренсе дөйөм халыҡ юлбашсыһы булып ҡалған.

Гректар уны Уранус тип атаған. Әгәр гректарға хас ялғауҙы алып ташлағанда, Уран килеп сыға. Был исем гиперборейҙарҙың, төньяҡ скифтарҙың, боронғо башҡорттарҙың ата-бабалары, грек мифтарына инеп, ҙурлығы буйынса Ҡояш системаһында өсөнсө урында торған планетаның - Урандың атамаһына әйләнә.

Бәлки, шулай итеп, беҙҙең Урал батыр боронғо заманда Уран батыр булғандыр? Урал тип беҙ тау һырттарын ғына түгел, уның армыттарынан башланып Каспий диңгеҙенә ҡойған йылғаны ла атайбыҙ. Әгәр В. Татищев иҫкә алған Свидас IX-X быуаттар араһында йәшәгән һәм Уран тураһында яҙған икән, уның һүҙҙәре, тау һырттарын йәки йылғаны билдәләүсе булараҡ, шул ваҡыттағы картаға инеүе лә ихтимал, тип өмөтләнергә мөмкин. Ысынлап та, X быуат һуңында - XI быуат башында билдәле инглиз-саксон картаһында Рифей тауҙарынан (Тәүратта Урал һырттарының атамаһы) Уранис йылғаһы башлана һәм Каспий диңгеҙенә ҡоя.

Бынан тыш, уран тигән боронғо башҡорт ҡәбиләһе лә булған. Риүәйәттәрҙә урандар ата-олаталарының Урал (Яйыҡ) йылғаһы бассейнында Уран нигеҙе булған гидронимдар йыш осраған "Ырымбур яғынан" килеүе тураһында һөйләй. Был өлкәлә Һамар йылғаһына Ҙур һәм Бәләкәй Уран йылғалары ҡушыла. Р.Ғ. Кузеев бында Һаҡмар йылғаһының да шундай ҡушылдыҡтарын билдәләй. Бәлки, Пиндар һәм Свидас буйынса, "барлыҡ халыҡтың атаһы эллиндарҙың Тәңреһе Уран беренсе батша булған" боронғо башҡорт дәүләтенең үҙәге бында урынлашҡандыр?

Дәлилдәрҙең етерлек булыуы боронғо заманда ғына түгел (Пиндар, беҙҙең эраға тиклем VI-V быуаттар), хатта урта быуатта ла Европала (Свидас) Урал йылғаһын Уран булараҡ белгәндәр һәм Урал батырҙың боронғо грек мифтарына Уран булараҡ инеп китеүе боронғо тәүсығанаҡтарҙа ла, гидронимдар һәм этнонимдарҙа ла раҫлау таба. Ысынлап та, үҙенең "Башҡорттар тарихы"нда Ә. Вәлиди раҫлауынса, "Урал" тауҙарының атамаһы беренсе тапҡыр XIII быуатта Сыңғыҙхан тоҡомдарының варисы Шибандың биләмәләрен һүрәтләгән Абулғази хан тарихында, шулай уҡ нуғай дастандарында иҫкә алына". Тимәк, "Урал" атамаһы икенсел булып, ә беренсел булып Европала билдәле булған боронғо башҡорт атамаһында тау һәм йылға исеме булған Уран тора булып сыға. Ваҡыт үткәс, "Урал" атамаһы тау һырттарының һәм йылғаның исеме булып нығына, әммә йылға атамаһы бөгөн дә башҡорттар араһында боронғо Яйыҡ булараҡ билдәле. "Йыай ик" - тыныс һыу тигәнде аңлата. Ә ҡәбилә атамаһында юлбашсының исеме - Уран - һаҡланып ҡала.

"Урал батыр" башҡорт эпосының геройҙарының да исемдәре башта Уран һәм Шүлгән яңғырашында булған. Әммә Шүлгән исеме лә беҙгә бер аҙ үҙгәртелеп килеп еткән, тип уйлайым. Элек уның исеме Сумған булғандыр, күрәһең. Башҡортостанда шул атамалағы мәмерйә лә бар. Ул ваҡытта ике туғандың исеме эпоста яҙылған ролдәренә тура килә. Уран үр - бейеклек (үргә - бейеккә) һүҙенән алынып, "үргә ынтылыусы", "юғарылағы", "өҫкө донъяла хакимлыҡ итеүсе" тигәнде аңлатһа, Сумған - аҫҡа сумыусы ер аҫты батшалығында йәшәүсе һәм хакимлыҡ итеүсе. Шүлгән йылғаһы ла Шүлгәнташ мәмерйәһенә инеү урынынан өс саҡырым төньяҡтараҡ ер аҫтына китә бит. Уның да борон Сумған тип аталыуы ихтимал. Күрәһең, һуңынан, ниндәйҙер ҡайҙандыр килеп ингән икенсе тел йоғонтоһонда ул да Шүлгәнгә әйләнгән.

Уралда булған сауҙагәрҙәр һәм хаж ҡылыусылар бында асылған еҙ ятҡылыҡтары, йылҡысылыҡ тураһындағы хәбәрҙе донъя цивилизацияһының башҡа үҙәктәренә лә таратҡан. Улар бынан Урал расаһына ҡараған аттарҙы һәм ошо ерҙә тыуған төрлө дини мифтарҙы алып киткән. Бынан тыш, Ҡара диңгеҙ буйынан Эгей диңгеҙе ярҙарына йөҙөп китеүсе арийҙарға ҡәрҙәш халыҡтар (уларҙы һуңынан гректар-ахейҙар тип атап йөрөткәндәр) төньяҡҡа киткән ҡәрҙәштәре менән туғанлыҡтарын онотмаған, уларҙың яҙмышы менән ҡыҙыҡһынып, бик күп быуаттар дауамында бәйләнеш тотҡан. Һәм уларҙың беренсе Тәңреһе булып дини йәһәттән алғараҡ киткән төньяҡ туғандары тарафынан илаһилаштырылған Уран торған. Боронғо Эллада донъяның һәм Тәңреләрҙең барлыҡҡа килеүен тап унан башлай ҙа инде. Боронғо грек мифтары шундай һүҙҙәрҙән башлана:" "Могучая, благодатная Земля породила беспредельное голубое Небо - Урана, и раскинулось Небо над Землей. Гордо поднялись к нему высокие горы, рожденные Землей, и широко разлилось вечно шумящее море. Уран - Небо - воцарился в мире. Он взял в жены благодатную Землю".

**Радик ВАХИТОВ.**
**(Дауамы бар).**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Һунарсылыҡ, ҡошсолоҡ һәм балыҡсылыҡ

Эре малдың ите, йылҡы ите кеүек үк, туҡланыу өсөн ҡулланылған, һөтөнән эремсек эшләнгән, ҡорот һәм май әҙерләнгән. Тиреһенән аяҡ кейеме һәм башҡа әйберҙәр тегелгән.

Ваҡ малдан башҡорттар күпләп һарыҡ аҫыраған. Ҡасандыр ярымкүсмә тормошта йәшәүсе башҡорттар өсөн ат кеүек үк мөһим роль уйнаған һарыҡтарҙы XIX быуат һуңында Башҡортостандың көнсығыш, Урал аръяғы райондарында күпләп тотҡандар. Төрлө төҫтәге, нигеҙҙә, аҡ йөнлө, ҡойроғо ныҡ майлы булмаған, ҡыҫҡа ҡойроҡло, тупаҫыраҡ, еңелсә бөҙрә йөнлө һарыҡтар киң таралған була. Башҡортостандың көньяҡ-көнсығыш өлөшөндә ҡаҙаҡ йәки ҡалмыҡ бөҙрә һарыҡтары осрай. Улар ҙур кәүҙәле, ҙур башлы, һәлбер ҡолаҡлы һәм майлы ҡойроҡло булыуҙары менән айырылып торған. Һарыҡтарҙың йөнө оҙон, йыуан һәм бөҙрә булған. Был һарыҡтар илдең башҡорттар йәшәгән ялан өлөшөндә тибенгә ҡулайлашҡан һәм уларҙы күпләп аҫырағандар. Улар ҡар күп яумаған һәм боҙлауыҡ булмаған ҡыштарҙа аттар менән бергә тибендә йөрөгән.

Ваҡ мөгөҙлө малдың атамаһы, эре малдыҡы кеүек үк, енесе, йәше һәм тыуыу ваҡыты буйынса төрлөсә аталған. Ваҡытында тыуған һарыҡ бәрәсен бәрән (тәкә бәрән, орғасы бәрән) тигәндәр. Йәйгеһен тыуған бәрән - йәйҙәүес (тәкә йәйҙәүес, орғасы йәйҙәүес) бүлтерек тип йөрөтөлгән. Көҙөн тыуған бәрәс - әтәмбәй (тәкә әтәмбәй, орғасы әтәмбәй).

Бәрәстәр кәрәкмәгән ваҡытта тыумаһын өсөн малдарҙы бергә көткән ваҡытта башҡорттар тәкәләргә яҙғы-йәйге осорға махсус туҙ алъяпҡыс - көйәк бәйләгән. Һөҙөмтәлә тәкәләр һарыҡтарҙы аталандыра алмаған.

Тәкәләр имеүҙән туҡтап, ике йәшкә еткәнсе тәкә бәрән тип аталған, имеүҙән туҡтаған һәм икенсе тапҡыр бәрәнләгәнгә тиклемге һарыҡтар - һарыҡ бәрән тип аталған. Ике йәштән өлкән тәкәләр - тәкә, һарыҡ тәкәһе, ә икенсе бәрәнләүҙән өсөнсө бәрәнләүгә тиклемге һарыҡтар - шешәк һарыҡ, аталандырыусы тәкә - ҡушҡар, өсөнсө бәрәнләгәндән һуң үлгәнгә тиклемге һарыҡ - һарыҡ, тоҡомһоҙ ҡалдырылған тәкә - беселгән тәкә, нормаль шарттарҙа ла бәрәнләмәгән һарыҡ - тыуса, үрсем бирмәгән һарыҡ - тыу һарыҡ, ағымдағы йылда бәрәнләмәгән һарыҡ - ҡыҫыр һарыҡ тип атала.

Иттән тыш, һарыҡтың йөнөн алғандар. Уны кейеҙ баҫыуға, кейеҙ тирмә ҡороуға һәм башҡа хужалыҡ кәрәк-ярағы: аяҡ кейеме эшләү (йөн ойоҡ бәйләү һәм итек тегеү), туҡыма эшләү өсөн файҙаланғандар. Һарыҡ тиреһе ҡышҡы кейем тегеү өсөн кәрәкле материал булып торған.

# Бәләкәй роль булмай...

## бәләкәй актер ғына була

**Һәр замандa ла театрға иғтибар юғары кимәлдә ҡала, сөнки ул йәмғиәттең үткәнен генә түгел, ә бөгөнгө ысынбарлығын, булмышын, йөкмәткеһен асып һалыусы, иртәгелеккә күҙ ташларға мөмкинлек биреүсе сәнғәт. Бер ҡасан да тормош мәғәнәһен һәм үҙен борсоған һорауҙарға яуаптар эҙләүҙән, үҙ-үҙен һәм уны уратып алған донъяны аңларға тырышыуҙан туҡтамаған кешелеккә театр сәнғәте һәр ваҡыт яҡын буласаҡ. Үҙендә әҙәбиәт, музыка, бейеү һәм башҡа бик күп сәнғәт төрҙәрен берләштереүсе театрҙың төп геройы - актер. Нәҡ уның оҫталығы, тәбиғи һәләте, ижадына булған етди ҡарашы тамашасыны театрға йәлеп итеүсе, үҙенә тартып тороусы ҡеүәтле көстәрҙең береһе. Республика театрҙарында ла илһамланып ижад итеүсе, тәрән уйҙарға һалыусы образдар тыуҙырыусы, ғөмүмән, үҙ эшенә мөкиббән ғашиҡ актерҙар бихисап. Уларҙың исемлегенә, һис шикһеҙ, Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры актеры Рәмзил СӘЛМӘНОВты һәм Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры актеры Урал ӘМИНЕВты ла индерергә була. Улар менән әңгәмә ҡорҙоҡ.**

**▸ Театр сәхнәһенә тәүге тапҡыр ниндәй образда сыҡтығыҙ һәм ул ваҡытта кисергән тойғоларығыҙҙы нисек һүрәтләр инегеҙ? Ваҡыттың үтеүе был кисерештәрҙе тоноҡландырманымы?**

**Рәмзил:** Театрға эшкә килгәс, тәүге ижад иткән ролемде, ул ваҡыттағы тулҡынланыуымды, оло сәхнәнән ҡурҡыуымды әле булһа яҡшы хәтерләйем. Ул "Амазонкалар" спектаклендәге бәләкәй генә роль ине. Сәхнәгә тамашасы араһынан күтәрелергә кәрәк. Үҙемдең сығышымды көтөп, тамаша залында, тамашасы артында, ишек төбөндә баҫып торам. Сәхнәгә күтәрелергә ваҡыт еткән һайын битгәрем ныҒыраҡ яна, ҡулдар ҡалтырай, йөрәк дөп-дөп тибә, үтәһе юлымды ҡат-ҡат күҙ алдынан үткәрәм, ғөмүмән, ярым үле, ярым тере хәлдәмен. Шулай ҙа ваҡыты еткәс, сәхнәгә күтәрелдем, ролемде уйнаным. Геройым ҡурҡаҡ, власть алдында ҡаушап төшә торған кеше ине, шуға күрә минең ныҡ тулҡынланыуым образды байытырға, ролемде ышандырырлыҡ итеп башҡарырға ярҙам ғына итте.

**Урал:** "Серле көршәк" әкиәтендәге яуыз Язит образында тәүге тапҡыр театр сәхнәһенә сыҡтым. Ул ваҡыттағы юғалып ҡалыу тойғоһон әле булһа онотмайым. Уҡығанда бәләкәй сәхнәләрҙә уйнап йөрөһәк тә, республиканың төп театры сәхнәһенә тәүге тапҡыр сығыу бер аҙ ҡурҡыу ҙа "бүләк" итте, һөйләү ҡеүәһен дә тотҡарланы.

**Рәмзил:** Театрға яңы эшкә килгән йәш актер өсөн иң ҙур еңеү - оло сәхнәнән ҡурҡыу тойғоһон кисереү һәм уны еңеү. Шулай ҙа һәр премьера, спектакль алдынан беренсе тапҡыр һыуға сумғанда була торған тулҡынланыу хисе юғалмай. Ул инде ҡурҡыу түгел, ә күңелде рәхәт кенә итеп ҡытыҡлаған тойғо. Ролде һәйбәт итеп башҡарырға ярҙам итеүсе был тулҡынланыуҙың бер ҡасан да юғалмауын теләйем. Үҙемә лә, коллегаларыма ла.

**Урал:** Уҙған ете йыл эсендә мин ҙур сәхнәгә күнектем, талапсан тамашасы алдында юғалып ҡалмаҫҡа өйрәндем. Бөгөнгә көндә үҙемде сәхнәлә ныҡлы баҫып тороусы актер итеп тоям һәм яңынан-яңы ролдәр өҫтөндә эшләү теләге менән янам.

**▸ Ошо йылдар эсендә ижад иткән образдарҙың ҡайһыһын күңелегеҙгә иң яҡыны тип иҫәпләйһегеҙ?**



**Рәмзил:** Быйыл театрҙа эшләүемә ун йыл булды һәм ошо ваҡыт эсендә байтаҡ ҡына ролдәр башҡарыу, төрлө характерҙағы геройҙарҙы сәхнәгә сығарыу, әкиәттән алып комедия, трагедия һәм драма әҫәрҙәрендә уйнау бәхете тейҙе. М.Кәримдең "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ" спектакелендә - Йәмил, төрөк авторы Тунджер Джюдженоглуның "Ҡорон"да - йәш ир, А.Вампиловтың "Өлкән улым"да - Ильин, А. Приставкиндың "Ночевала тучка золотая" спектаклендә - чечен малайы Алхузур, В.Шекспирҙың "Ромео һәм Джульетта"һында Тибальт һәм башҡа бик күп образдарым миңә берҙәй ҡәҙерле һәм яҡын. Уларҙың һәр береһенә минең күңелем, йөрәк ялҡыным, уйҙарым һәм борсолоуҙарым һалынған. Сәхнәгә сығарған һәр бер ролемдән үҙем өсөн ниндәйҙер асыш эшләйем. Быйылғы миҙгелдә сығарылған һәр премьерала ла шулай уҡ ролдәрем бар. Артабан да ижади йөгөмдә мәғәнәле, тамашасы күңеленә хуш килерлек ролдәрем күп булыр, тип ышанам.

**Урал:** Мин дә һәр ролемде яратып, бар күңелемде биреп, Станиславскийҙың "Бәләкәй роль булмай, ә бәләкәй актер ғына була", тигәнен иҫтә тотоп башҡарам. Улар иҫәбенә Т. Дәүләтбирҙинаның "Минең ғаиләм" спектаклендә - Азат, В. Аллендың "Хәйерле иртә, Энид"ында - Пол Поллак, М.Кәримдең "Ай тотолған төндә" спектакелендә - Диуана, В.Красногоровтың "Эксперимент"ында Тимур һәм башҡаларҙы индерергә мөмкин. Шулай ҙа уҙған йылдың декабрендә сәхнәгә сығарылған "Руди.Never.Off" спектаклендә бөйөк шәхесте, балет оҫтаһы Рудольф Нуриевты кәүҙәләндереүемдә әлеге ваҡытҡа иң оло ҡаҙанышым һәм уңышым, тип билдәләйем. Әйткәндәй, нәҡ ошо ролем өсөн мәртәбәле премияға тәҡдим ителдем.

Рудольф Нуриев тураһында спектаклгә әҙерлек ике йыл барҙы. Режиссер Айрат Абушахманов миңә был бөйөк шәхес хаҡында төрлө китаптар уҡырға, мәғлүмәттәр йыйырға ҡушты. Рудольф Нуриев ролен уйнау өсөн актерҙар араһында кастинг, һайлап алыу булманы, был бурыс тәүҙән үк миңә тәғәйенләнде. Әҙерлек барышында мин бер аҙна тирәһе хореография училищеһында шөғөлләндем, шулай уҡ Опера һәм балет театры репетицияларын ҡараным, балет сәнғәтенең нескәлектәрен аңларға тырыштым. Беҙҙең алда сәхнәлә мотлаҡ Рудольф Нуриевтың күсермәһен күрһәтергә, тигән маҡсат торманы. Һәм был мөмкин дә түгел. Төрлө этюдтар формаһында ҡоролған сценарий аша уның теге йәки был ситуацияла үҙен нисек тотоуын күрһәтеү, ғүмер миҙгелдәре аша уның күңел торошон сағылдырыу, кисерештәрен асырға тырышыу булды маҡсатыбыҙ. Мин быларҙың барыһын да тамашасыға еткерә алдым, тип өмөт итәм. Ләкин, нисек кенә булмаһын, баһаны тамашасы ҡуя.



**▸ Күңел торошоғоҙға, ихтыярығыҙға, булмышығыҙға, характерығыҙға ҡаршы килгән ролде башҡарырға тура килгәндә үҙ-үҙегеҙҙе нисек "һындыраһығыҙ"?**

**Урал:** Әгәр ҙә режиссер мине ошо образда күреп, ролде ышанып тапшырған икән, тимәк, булдыра алам, тигән һүҙ. Ә күңел торошона йәки характер үҙенсәлегенә һылтанып, ролдән баш тартыу йәки урын еренә еткереп уйнамау - актер өсөн ғәфү итмәҫлек хәл, сөнки вузда уҡыған ваҡытта уҡ ниндәй роль биреләүгә ҡарамаҫтан, актер уны тамашасы ышандырырлыҡ итеп уйнарға тейеш икәнлеген яҡшы аңлаталар.

**Рәмзил:** Теге йәки был әҫәрҙе уҡып сыҡҡас, тап һинең өсөн генә яҙылған ролде күргәндәй булаһың һәм нәҡ ошо геройҙы уйнарға тейешмен, тип уйлайһың. Ләкин режиссер бөтөнләй икенсе ролде тәҡдим итергә мөмкин һәм һин, әгәр ҙә үҙеңде ысын актер итеп һанайһың икән, бер ниндәй ҡаршылашыуһыҙ, һыҡтауһыҙ, һүҙ көрәштереүһеҙ уны сәхнәгә сығарырға бурыслыһың. Бындай осраҡтарҙы мин бер ҡасан да үҙемде һындырыу йәки ихтыярыма, булмышыма ҡаршы барыу, тип ҡабул итмәйем. Мин - актер, мин - режиссер ҡулындағы пластилин һәм уның нисек итеп актерҙы әүәләүенән, уны әҙерләүенән тора спектаклдең уңышлы йәки уңышһыҙ килеп сығыуы. Роль өҫтөндә эш башлағанда геройға үҙемдең характерҙы йәки хис-тойғоларҙы ҡушып ебәреү күренештәре булыуы мөмкин, ләкин репетиция барышында режиссер уларҙы күрә һәм герой менән мине "айыра". Шуға күрә, был осраҡта режиссер мине һындыра тип түгел, ә кәрәкле юҫыҡҡа бөгөп ҡуя, тип әйтеү дөрөҫөрәк булыр. Актерлыҡты үҙләштергәс, ошо йүнәлештә эшләгәс, һөнәрҙе бар йәһәттән дә ҡабул итә белергә тейешбеҙ.

**Урал:** Тормош булғас, төрлө саҡ була. Бер мәлдә шатлыҡтан осоп йөрөйһөң, икенсе юлы ҡайғынан бөгөлөп төшәһең - был һәр кем башынан үтә. Актер ҙа башҡаларҙан бер нәмәһе менән айырылмай һәм ул да төрлө хәл-ваҡиғалар тулҡынында йәшәй. Ләкин уларҙың сәхнә тормошо ла бар һәм унда иһә актер бары тик геройының донъяһын, уның хис-тойғоларын, кисерештәрен, уйҙарын, характерын һынландырырға тейеш. Актер өсөн был ике тормошто айырып ҡарай белеү һәм аңлау мөһим. Мәҫәлән, ғәҙәти тормошта ниндәйҙер ҡайғылы ваҡыт булыуы мөмкин, ә сәхнәлә шат күңелле, бошмаҫ, күңелсәк геройҙы һынландырырға кәрәк, йәки - киреһенсә. Шулай уҡ ауыр ваҡытта уйналған күңелсәк роль миңә, мә-

*Тормош булғас, төрлө саҡ була. Бер мәлдә шатлыҡтан осоп йөрөйһөң, икенсе юлы ҡайғынан бөгөлөп төшәһең - был һәр кем башынан үтә. Актер ҙа башҡаларҙан бер нәмәһе менән айырылмай һәм ул да төрлө хәл-ваҡиғалар тулҡынында йәшәй. Ләкин уларҙың сәхнә тормошо ла бар һәм унда иһә актер бары тик геройының донъяһын, уның хис-тойғоларын, кисерештәрен, уйҙарын, характерын һынландырырға тейеш. Актер өсөн был ике тормошто айырып ҡарай белеү һәм аңлау мөһим. Мәҫәлән, ғәҙәти тормошта ниндәйҙер ҡайғылы ваҡыт булыуы мөмкин, ә сәхнәлә шат күңелле, бошмаҫ, күңелсәк геройҙы һынландырырға кәрәк, йәки - киреһенсә. Шулай уҡ ауыр ваҡытта уйналған күңелсәк роль миңә, мәҫәлән, башымда ҡайнаған ҡатмарлы уйҙарҙан арынып торорға ярҙам итә һәм күңелемә бер аҙ еңеллек бирә.*

ҫәлән, башымда ҡайнаған ҡатмарлы уйҙарҙан арынып торорға ярҙам итә һәм күңелемә бер аҙ еңеллек бирә. Мин театрға килеү менән театр ишеге артындағы донъямды күпмелер ваҡытҡа "онотам" һәм бары тик ролем менән генә йәшәй башлайым. Был, үҙ сиратында, мейене ял иттерергә һәм быға тиклем сиселмәҫ булып тойолған хәл-ваҡиғаларҙы сисеү өсөн асҡыс табырға ярҙам итә. Бына ошоноң менән дә миңә үҙемдең һөнәрем ҡәҙерле.

**Тормошта ла уйнауығыҙҙы дауам итмәйһегеҙме?**

**Рәмзил:** Спектаклде уйнап бөтөп, шаршау ябылғандан һуң, бер аҙ тын алып, гримды сисеп, үҙ хәлемә, булмышыма килəм һәм геройымды театрҙа "ҡалдырып" ҡайтып китәм.

**Урал:** Спектаклде уйнап сыҡҡандан һуңғы тәьҫораттарға ҡарағанда, ролгә әҙерлек барышында булған тулҡынланыуҙар, тойғолар миңә ныҡыраҡ тәьҫир итә. Нисек кенә булмаһын, һәр роль актерҙа ниндәйҙер эҙ ҡалдыра, ләкин тулыһынса уның тормошона, характерына йәки булмышына йоғонто яһамай. Актерҙың тормошта ла уйнауын дауам итеүен ниндәйҙер спектаклдән алынған айырым фразалар, һүҙбәйләнештәр, һөйләмдәр ҡулланыуында күрергә була. Ә инде спектаклдәге ролеңән сыға алмайынса, үҙенең тормошонда ла шул ролде уйнауын дауам итеүсе кешене мин иҫәүенгә тиңләйем. Был, минеңсә, йәшәү, уйнау түгел, ә ҡыланыу ғына.

**Үҙегеҙгә әҫәр яҙыу һәм уны сәхнәләштереү мөмкинлеге булһа, ижад емешегеҙ ниндәй темаһы яҡтыртыр ине?**

**Урал:** Мин йә мөхәббәт, йә иман темаһына мөрәжәғәт итер инем. Мөхәббәт булмаһа, донъяла йәшәүҙең йәме лә, тәме лә, ҡыҙығы ла, мәғәнәһе лә юҡ. Шуға күрә спектаклдә мөхәббәт темаһы һәр саҡ яҡтыртылырға тейеш, тип уйлайым, сөнки шул саҡта ғына әҫәр тамашасы өсөн ҡыҙыҡлы булаcаҡ. Шулай уҡ иман темаһы өҫтөнлөк иткән әҫәрҙәрҙең дә һәр саҡ үҙ тамашасыһын табасағына шигем юҡ, сөнки имандың халыҡтың, иманлы илдең генә киләсәге ышаныслы. Иманға таянып йәшәү, уны һанлау тураһындағы әҫәрҙәр аша балаларҙы, йәштәрҙе тәрбиәләү ҙә үҙенең һиҙғай һөҙөмтәләрен бирмәй ҡалмаясаҡ.

Режиссер булараҡ фекер йөрөткәндә иһә, мин тәү сиратта, сәхнәләге әҫәр аша ысынбарлыҡ тормошто күрһәтеүҙе, бөгөнгө хәҡиҡәтте яҡтыртыуҙы маҡсат итеп ҡуйыр инем. Шулай уҡ минең ҡуйылыштағы спектакль аңлашылмаған диалогтарҙан, күпертмәләрҙән, ғөмүмән, яһалмалыҡтан азат булыр ине.

**Рәмзил:** Был йәһәттән Урал менән фекерҙәр тап килә. Ғөмүмән, ижад итеүсе бар авторҙар ҙа мөхәббәт темаһын урап үтмәй, сөнки ул - мәңгелек. Шуға күрә минең дә әҫәремдә мөхәббәт темаһы төп урынды биләр ине. Шулай уҡ бөгөнгө көндөң актуаль мәсьәләләренең береһе - туғандар, дуҫтар, ғөмүмән, кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәрҙең һалҡынайыуы. Барлыҡ тойғоларҙы, мөнәсәбәттәрҙе бары тик матди байлыҡҡа ғына ҡайтарып ҡалдырыу күренештәренең артыуы хәүефкә һала. Шуға күрә, сәхнәгә спектакль әҙерләп сығарыу мөмкинлегем булһа, төп нигеҙ итеп егет менән ҡыҙ араһындағы ғына һөйөүҙе түгел, ә, ғөмүмән, йылы тойғолар, изге хистәр, кешеләрҙең бер-береһенә булған мөхәббәтен сағылдырыуҙы маҡсат итеп ҡуйыр инем.

**Егеттәр, ә һеҙ бер-берегеҙҙең ижады менән ҡыҙыҡһынаһығыҙмы, яңы эштәрегеҙ менән танышып бараһығыҙмы?**

**Урал:** Үҙемдең генә ижадыңа сумып йәшәү дөрөҫ түгел, сөнки коллегаларыңдың башҡарған ролдәрен ҡарау, уларҙың уйынын күҙәтеү, эштәрен баһалау актерҙы һөнәри яҡтан байыта, ҡанатландыра, юғарыға әйҙәй. Шуға күрә мин үҙебеҙҙең театрҙа ғына түгел, ә республиканың башҡа театрҙарында уйнаған коллегаларымдың, шул иҫәптән, Рәмзилдең дә ижады менән танышып барырға тырышам. Һәр бер театрҙа күҙгә ташланып торған актерҙар бар. Уларҙың ниндәй роль уйнауына йәки сәхнәгә сығыу йышлығына ҡарамаҫтан, тамашасы уларҙы яҡшы белә, ижадтарын үҙ итә, спектаклдәренә ихлас йөрөй. Мин Рәмзилде нәҡ ошондай актерҙар рәтенә индерәм. Ул һәр бер сығышын тамашасының иҫендә ҡалырлыҡ итә, һәр ролен кешене уйлатырлыҡ итеп уйнай, геройҙарының тормошо менән "йәшәй". Шулай уҡ Рәмзилдең кешелекле, ябай, ниндәй осраҡта ла үҙ-үҙе булып ҡала белеүе лә мине һоҡландыра.

**Рәмзил:** Ысынлап та, үҙ ҡаҙанында ғына ҡайнау күренеше актер өсөн ят булырға тейеш. Бары тик үҙ ролдәрең, геройҙарың менән генә "ғүмер итеү" актерҙы баҫырға, һөнәри яҡтан тоноҡландырырға мөмкин. Шуға күрә коллегаларҙың ижадынан күҙ яҙлыҡтырмайынса, уларҙың уңыштарын, ҡаҙаныштарын һәм ыңтылыштарын барлап торорға кәрәк, тигән фекерҙәмен. Шәхсән үҙем ошо юлдан барам һәм республика театрҙарында барған спектаклдәр, шул иҫәптән Урал уйнағандары менән дә, танышып барырға тырышам. Тәү сиратта, коллегамдың үҙ эшенә талапсан булыуын, һәр ролен мөкиббән китеп башҡарыуын, ижадына етди мөнәсәбәтен билдәләп үтер инем.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ғүмерен яратҡан һөнәренә бағышлау һәр кемгә лә эләкмәгән оло бәхет. Эштәре хаҡында һөйләгәндә күҙҙәре янып, йөрәктәре ялҡынланып типкән беҙҙең әңгәмәселәребеҙҙең нәҡ ошондай бәхетлеләр рәтендә булыуына шик юҡ. Үҙҙәренең һөнәренән йәм һәм ғәм табып йәшәүсе, театр тигән могжизәле донъяның уртаһында ҡайнаусы йәш актерҙарға артабан да ижад ҡомары һүнмәүен теләргә генә ҡала.**

**Гөлназ САФУАНОВА**
**әңгәмәләште.**

ЮЛДАР САЙТЫНДА

# ЗАҢЫН АҢЛАП...

## заман менән йәнәш атла

**"Борон бер аҡыл эйәһенән "Кемде үҙем менән юлдаш итеп сәфәргә алып сығырға икән?", тип һораған берәү. Аҡыл эйәһе: "Һин һис аптырама, иртә менән юлға сыҡ, ул үҙе осрар", - тигән. "Иртә, тигәнең ҡасаныраҡ инде, сәғәте менән әйтһәңсе", - тигән теге кеше. "Һин ҡояшҡа иғтибар ит, таң һарыһы беленә башланымы, юлға сыҡ", - тип кәңәш биргән аҡһаҡал. Теге кеше аҡыл эйәһенең кәңәшен тотҡан, юлынан да уңған, ти. Шуға ла, "Иртә торған - отҡан, һуңға ҡалғаны отолған" тигән әйтемде егәрле кеше һәр саҡ иҫтә тотҡан. Аҡыл эйәһе лә шуға ишара яһаған бит". Түбәндәге әңгәмә ана шул иртә торған юлсы образын күҙалларға мөмкинлек биргән хәҙерге заман кешеһе, Баймаҡ районы Нигәмәт ауылының оло быуын вәкилдәренең береһе Оморҙаҡ Мөхәмәҙиә улы Әүәлбаев менән.**

**Хәҙер һәр кем: олоһо ла, кесеһе лә, яңы донъя көтә башлағаны ла, тормош ауырлығын заманға япһарып, зарланырға ярата, ғүмерҙәре иртә өҙөлөүенә лә шул ауырлыҡ сәбәп булып тойола. Быға ҡарата һеҙ ниндәйерәк фекерҙәһегеҙ?**

- Замандың тәрлә сағы була: мин әле һигеҙенсе тиҫтәмде тултырҙым, тик һуғыш осорондағы һымаҡ ауырлыҡтың ҡабатланғанын күргәнем юҡ. Бына ул осор һәр кемгә үҙ ауырлығын һиҙҙерҙе. Яңы ғына баш күтәреп килгән колхоз тулыһынса ҡарт-ҡоролар менән бала-сағалар ҡулына тороп ҡалды. Беҙҙең Баймаҡ районының "Үрнәк" хужалығын ғына (хәҙерге "Салауат" исемендәге) алайыҡ. Түбәнге Йәйыҡбайҙа Украинанан килеп, һөргән срогын тултырыусы Яков Лакиза бабай, броль менән ҡалыусы 2-3 комбайнсы һәм тағы әрмегә алыныу йәшенән уҙған оло ағайҙар ғына тороп ҡалды. Ләкин нисек кенә итһәң дә, ҡул көсө лә (ат транспортын, техниканы әйтеп тә тормайым инде) етешмәй ине.

Әлеге көндә 8-9 йәшлек балаларҙың эш менән булғанын күҙ алдына ла килтереп булмай. Ата-әсәләр улар өсөн үҙҙәре эшләй, ә балаларын нисек тә ял иттереү, лагерҙарға ебәреүҙе хәстәрләй. Унан килеп, балалар ҙа тиҙ генә ауырып бара бит. Мин һуғыш осоронда 9 йәштә булғанмын. Беҙ ата-әсәйҙәрҙең һүҙен доға кеүек аңға һеңдерә инек. Уҡытыусының һәр һүҙен тормош ҡануны итеп ҡабул иттек. Уҡытыусылар беҙгә: "Һеҙ бер көн эшләһәгеҙ, дошман шунынса артҡа сигенер", - ти ине. Ә беҙ был һүҙҙәрҙе девиз кеүек итеп ҡабул иткәнбеҙ. Тәүге йылдарҙа утау кеүек эштәр бирһәләр, артабан бесән йыйыу, күбә тарттырыу, ышыртҡыла йөрөү, Бөрйән районына сығып, ағас ҡырҡыу кеүек эштәр эләгә ине. Йәшең үҫә барған һайын, эш ауырлығы ла, күләме лә арта төшә. Йәштән эшкә күнегелде шулай. Әсәй гел генә: "Эштән кеше үлмәй, өйрәнеүең - үҙең өсөн, эшең - кеше өсөн, кеше сирҙән үлә. Сирләргә тырышма, сынығырға тырыш. Шыңшыуланма, кеше көләр, салт бул, эшләнгән эшеңә кеше һоҡланһын, ҡулыңа күҙ эйәрмәһен", - ти торғайны. Әсәйгә эйәреп, һигеҙ йәштән бесән йыйырға, 9-10 йәштә сабырға, ә артабан күбә эшләү, кәбән һалыу эштәренә үҙенән-үҙе күнегелде. Сынығырға тырыштым. Эш, ауыр булһа ла, үлтермәй, шуға ла әйтәләр бит: "Эшләгән - тешләгән, иренгә ризыҡ тейгән". Дөрөҫ. Беҙҙең осорҙа хәҙерге кеүек лагерь, ял урындары тураһында хыял да итеү мөмкин булманы. Унан килеп, бик арыһаң, берәй ун минут ял итһәң, арыу үтә лә китә. Йәш кешенең организмы, нисек күнектерһәң, шулай үҫешә, тип уйлайым мин. Йәш саҡта арып, йонсоп ултырғанымды хәтерләмәйем. Шуға ла мин хәҙерге балаларҙың хеҙмәткә күнекмәүен ата-әсәләренең бәпләүенән, ҡурсыуынан киләләр, тип уйлайым. Ғөмүмән, хеҙмәт тәрбиәһе төп урында торорға тейеш. Эшкә күнеккән кеше һәр ваҡыт итәғәтле, ярҙамсыл, донъяһы теүәл, бала-сағаға ҡарата ла ихтирамлы була. Шундай кеше генә матур йәшәргә ынтыла.

**Һүҙегеҙгә ҡеүәт. Бына һеҙ 7-8 йәштән эшкә күнеккәнһегеҙ, балаларығыҙ ҙа эш рәтен белеп үҫкән. Күндәм ат - күтәремле, тиҙәр. Һеҙ колхозда 48 йыл эшләгәнһегеҙ, шуның егерме йылдан ашыуын шофер булғанһығыҙ. Тимәк, ял итеү мөмкинлеген дә сикләргә тура килгән түгелме һеҙгә? Шул уҡ осорҙа ҙур йорт та һалып өлгөргәнһегеҙ. Ауылда иң күркәм йорттарҙың береһе - һеҙҙеке...**

- Минең ҡатыным да бик сос бит. Йорттағы, ғаиләләге бар эштәрҙе тиҙ генә ойоштора һалып ебәрә. Балалар ҙа эшкә таҫыллы булды, һәр яңы һөнәр күреп, өйрәнеп үҫте. Ваҡыт яғы самалы булды, әммә өлгөрөлдө. Кешенең эше ни тиклем күп булһа, ул шул тиклем өлгөр була. Унан һуң, элек кеше бер-береһенә эскерһеҙ ярҙам итте, хаҡ һораманы, эсергә таптырманы. Хәҙер генә кешеләрҙең бер-береһенә мөнәсәбәте бер аҙ үҙгәреп китте, үҙҙәрен генә ҡайғыртыусылар күбәйҙе.

**Хеҙмәт юлығыҙҙың 14 йылын профком рәйесе булып, тиҫтә йылын техника хәүефһеҙлеге буйынса инженер булып та эшләгәнһегеҙ. Шул кимәлгә күтәрелерлек белемде нисек, ҡасан туплаһығыҙ һуң?**

- Әсәй "Белгән белгәнен эшләр, белмәгән - беләген тешләр" тип әйтә торғайны. Мин быныһ дөрөҫлөгөнә 1951 йылдан 1954 йылдың октябренә тиклем әрмелә хеҙмәт иткәндә ышандым һәм миндә уҡыуға теләк уянды. Ҡайтҡас та колхоз рәйесе Мырҙаҡаев Йыһанур ағай Сибайға шоферлыҡҡа уҡырға ебәрҙе. Урыҫ егеттәре менән аралашып, ярайны уҡ шымарып та алдым. "Ауыл малайы" мөһөрө юғалды. Артабан Юлдыбайға барып, тағы ла белемде арттырҙым. Өйләнгәс, тормош әҙерәк мәшәҡәтен өйөңкөрәнe, шулай ҙа алты бала тип тормай, Рабиға ла әйҙүкләп торғас, Силәбе өлкәһе Копейск ҡалаһында автомеханиктар әҙерләү техникумына уҡырға индем. Уны ситтән тороп уҡып тамамланым. Ошо урында артабан уҡыуға нөктә ҡуйҙым, сөнки балаларҙың бишеһе мәктәпкә барҙы. Балаларҙы уҡытыу беренсе урынға күсте. Ғаиләм миңә бер ваҡытта ла ҡамасау булманы. Ҡатындан уңдым. Эштән уңдым, ауылдаштарҙан, күршеләрҙән уңдым.

**Берәүҙәр бөгөн тормош ҡытыршылыҡтарын иктисади көрсөккә, икенселәр илдәге тороҡҡоло-тоторокһоҙ реформаларға, өсөнсөләр колхоз-совхоздарҙың тарҡалыуына япһара. Асылда, хикмәт нимәлә һуң?**

- Минеңсә, кешеләрҙең оҙайлы йылдар әҙергә бәҙер булып өйрәнеүендәлер. Ә төптән уйлаһаң, һәр нәмә үҙгәрешкә дусар булырға тейеш. Бер ҡоролош икенсеһен алмаштыра бит. Кешенең аңында ла үҙгәреш булырға тейеш. Үҙ өҫтөңдә эшләү һәр кемгә фарыз. Заманға яраҡлашыу түгел, ә заман менән йәнәш атларға, замандың боролош-бөгөлдәрен, һынау һәм бүләктәрен алдан фаразларға, уларға әҙер булырға кәрәк. Ситтән эш эҙләгәнсе, үҙ ауылыңда эш асыу урынлы булыр ине: кемдер күпләп мал көтөп, башҡаларға эш урыны булдырһын; хәҙер һәр кемдә машина, трактор, көнкүреш техникаһы - уларҙы тәҙәтеү-төҙәкләндереү буйынса ла эш ойошторорға мөмкин. Беҙҙең ауылда ундай тырыш кешеләр бар, әммә улар бик аҙ. Күп кеше ситкә сығып китеп аҡса эшләй, кемдәргәлер бил бөгә.

**Һеҙ тормошта хеҙмәтте һәр саҡ беренсе урынға ҡуйғанһығыҙ. Тулы ҡанлы, һау-сәләмәт йәшәүҙең тағы ниндәй серҙәре бар?**

- Бер ниндәй ҙә сер юҡ: беренсенән, үҙеңде, кеше булараҡ, ихтирам ит, ярат, икенсенән, кешеләргә лә шуны телә. Күңел теләгәнсе эшлә, ял ит, аша, тимәк, күңелеңде тыңла. Күңелгә ят булған һәм ул теләмәгән бер нәмәне лә көсләк менән эшләмә. Һәр көнөңә - рәхмәтле, ризығыңа ҡәнәғәт булып, өлгәшелгәндәрҙе тәңкит күҙлегенән ҡабул итеп, ҡәнәғәтләнеү тойғаныс эшләргә лә эшләргә кәрәк. Иң мөһиме - хәрәкәт. Хәрәкәттән тыуа бар бәрәкәт.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ағайыбыҙ өҫтәлгә һалған бихисап Маҡтау ҡағыҙҙарын, тиҫтәләгән миҙалдарын һыйпап ҡуя. Күҙендә йәшлек осҡондары баҙлап китә. Ошонда уның тағы бер матур сифатын шәйләйһең: рәхмәтле була белеү.**

**Рәйсә ИҪӘНБАЕВА.**
**Баймаҡ районы Нигәмәт ауылы.**

**✓ Һаҡ ҡына күҙҙәрен асып ҡараны. Тегеләр юҡ ине. Аллаһы Тәғәлә, бәлки, әсәһенең көн-төн ҡылған доғаларын ҡабул иткәндер... Ул - тере! Әсирҙә лә түгел! Усман, бар көсөн йыйып, эйелә-боҫа яҡындағы урманға йүгерҙе.**

КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ

# КУЛАК БАЛАҺЫ

Ниндәй генә замана булыуға ҡарамаҫтан, тормош үҙ яйы менән бара бирҙе. Усман мәктәпкә барған йылы Кинйәбикә апаһына ла бәхет йылмайҙы. Әле ун алты ғына йәш тулыуына ҡарамаҫтан, күрше Байым ауылынан уны Ишмөхәммәт исемле үтә лә егәрле, эшсән егет кәләшлеккә һоратты. Апаһы, алай ҙа, ялындырып торманы. "Өләшмә тейгән көмөшөм" тип сыҡты ла китте... Колхозда бригадир булып эшләгән ифрат та булдыҡлы был кеше менән заманына күрә гөрләтеп донъя көтөп алды ла китте Кинйәбикә апаһы.

Аслы-туҡлы көйөнсә күрше ауылға дүрт-биш саҡырым араға йәйәүләп йөрөп уҡыны Усман. Шуға ҡарамаҫтан, мәктәптә үҙен ифрат та тыныш, һәләтле уҡыусы итеп танытты. Тик етенсе синыфты тамамлаған йәйҙә илгә фашист Германияһы һуғыш башланы. Нисек кенә теләмәһен, Усман артабан уҡыуын дауам итә алманы. Инде ун биш йәше тулған үҫмер, башҡа колхозсылар менән берлектә, барлыҡ көсө менән дәһшәтле Ҡыҙыл Армиябыҙҙы азыҡ, кейем-һалым менән тәьмин итеү эшенә йомолдо. Һуғыштың тәүге көнөнән үк Әҙһәм һәм Исмәғил ағалары һуғышҡа алынды. "Халыҡ дошманы"ның балаларын дөйөм дошманға - немец илбаҫарҙарына ҡаршы һуғышҡа барыуҙан мәхрүм итмәнеләр шулай ҙа... Бер-бер артлы ике "похоронка" алып, күҙ йәшен йылғалай түгелдергән әсәһе менән бергә, әлбиттә, Усман да ныҡ ҡайғырҙы. Әммә оҙаҡ күҙ йәше түгеп, уфтанып ултырыр заман түгел ине.

- Әсәйҙе һаҡла, һәр яҡлап ярҙам ит, - тине Усман ун өсөнсө йәш менән барған Зиннур туғанына. Мин дә, бәлки, әйләнеп ҡайта алмаҫмын. Аллаһ ҡушҡанын күрербеҙ инде.

Әсә кешегә икенсерәк һүҙҙәр әйтергә кәрәк, тип уйланы.

- Фашистарҙы еңеп ҡайтырбыҙ, - тине ул илауҙан һыҡылған әсәһенә. - Хәҙер Ҡыҙыл Армия көслө бит...

Башҡаса әсәһен нисек йыуатырға ла белмәне ун етеһе күптән түгел генә тулған егет. Сираттағы гәзиз улын ут эсенә оҙатҡан әсәне, әлбиттә, бер нисек тә йыуатыу мөмкин түгел ине.

- Башыңды һаҡла, улым, - тине әсәһе. - Үҙем һинең имен-һау әйләнеп ҡайтыуыңды көнө-төнө Аллаһы Тәғәләнән һораясаҡмын. Намаҙ һайын доға ҡыласаҡмын...

Әсәһе Ҡуяндарҙан ғына оҙатып тороп һалды. Мең туғыҙ йөҙ ҡырҡ өсөнсө йылдың октябрь урталары ине. Көндөҙ һәүетемсә йылы ғына торһа ла, төндә ерҙәге күләүектәр шекәрләнеп туңа ла башланы. Фронтҡа алынғандар йыйылған көн ап-аяҙ, ҡояшлы. Этҡол ауыл советы янында байтаҡ ҡына кеше йыйылған. Байым ауылынан бала саҡтан белгән Нуритдин ҡорҙаш та бында икән. Бер-нисә ауылдан йыйылған төрлө йәштәрҙәге ун бишләп кеше араһында Тәкәһуҡҡандан гармунсы Рәсүл ағай ҙа бар ине. Уны, һуғыш яраһы төҙәлеп бөткәнсе, тип, ике айға ғына ҡайтарып торғандар. Бер аҙ аҡһанлай. Хәрби кейемдә. Түшендә ике миҙалы ла бар. Уны күргәс тә, әле мыйыҡ та үҫеп етмәгән егеттәргә бер аҙ дәрт өҫтәлгәндәй булды. Өҫтәүенә, үҙенең тальян гармунын да алған бит әле. Әйтерһең дә туйға йыйынған...

Өс арбанан торған ылауға ултырғас та, еңелсә генә ҡыҙмаса булып алған Рәсүл ағай тальянкаһында ифрат та моңло итеп урам көйөн һыҙҙырап ебәрҙе. Көй-моңға әүәҫ Усман түҙмәне, гармунға ҡушылып йырлап та ебәрҙе.

*Баҫыу ҡапҡаһын сыҡҡанда*
*Күтәрелде томандар.*
*Донъя хәлен белеп булмай...*
*Һау булығыҙ, туғандар...*

Башҡалар менән бергә туғанын оҙата килгән Шәһиҙә, Кинйәбикә апайҙары, күҙ йәштәрен яулыҡ осо менән һөртә-һөртә, ҡул болғап тороп ҡалдылар. Оҙатыусыларҙың барыһы ла үҙҙәренең яҡындарының тере көйө әйләнеп ҡайтыуына өмөт итә ине...

* * *

Өфө янындағы "Цыганская поляна"ла 32-се уҡсылар полкында ҡыҫҡа ваҡыт эсендә хәрби белемгә өйрәнгәндән һуң, ҡырҡ өсөнсө йылдың декабрь баштарында, әле ун һигеҙе лә тулмаған Усман фронтҡа оҙатылды. Нуритдин ҡорҙашы уның менән бер часҡа, хатта бер взводка эләкте. Янында бер котелоктан ашап йөрөгән яҡташың булғас, әлбиттә, күңелгә бер аҙ йылы ла һымаҡ. Яңы килгәндәрҙең барыһы ла көн дә һуғыш яланында йөҙәрләп, ә, бәлки, меңәрләп тә һәләк булып торған яугирҙарға мотлаҡ алмаш кәрәк булыуын, әлбиттә, яҡшы аңлай ине. Әле генә килгән һалдаттар ҙа йәнен-тәнен аямай ут эсенә инергә әҙер. Тәрбиәүи-сәйәси партия эше, әлбиттә, ифрат ныҡлы ойошторолған ине частарҙа ул саҡта.

1-се Белоруссия фронты ғәскәрҙәре составындағы 1-се Гвардия мотоуҡсылар бригадаһында автоматсы булып һуғышҡа инде. Көнсығыш Белоруссия ерендә ике ай самаһы оборона һуғышы алып барҙылар. Оҙайлы оборонаның ни өсөн икәнен, әлбиттә, һалдаттар барыһы ла төшөндө. Ғәскәр ниндәйҙер ҙур алышҡа көс йыя...

Унан - һөжүм, тағы оборона, бер аҙ сигенеү... Тағы һөжүм... Һуғыш булғас, барыһы ла булалыр инде. Ҡыш, яҙ үтеп, йылы йәй ҙә килеп етте. Могилев өлкәһендәге Бобруйск ҡалаһы өсөн биш көн, биш төн буйына барған ҡаты һуғышта бик күп иптәштәрен юғалтты Усман. Уның күҙ алдында ярылғыс пуля Хөсәинов Нуретдин ҡорҙаштың уң ҡулын өҙөп алып китте. Уны ашығыс рәүештә медсанбатҡа, унан тылға оҙаттылар. Ҡайһы ҡаланы ниндәй эҙмә-эҙлектә азат иткәндәрен дә инде ул әллә ни хәтерләмәй. Ул азат иткән Бобруйск ҡалаһынан тыш, Барановичи, Калинковичи, Гомель, Речица... Ә эреле-ваҡлы ауылдарҙы инде һанап та бөтөрлөк түгел. Фашистар тарафынан бөтөнләйгә яндырылап, тик мейес мөрйәләре генә һерәйеп ултырған тиҫтәләгән ауылдарҙы күрергә тура килде.



Речица ҡалаһы йүнәлешендә барған һуғышты бөгөнгөләй хәтерләй ул. Әйе, бөгөнгөләй, сөнки ошо алышта уның һуғыш юлы ҡырҡа һынылыш кисерҙе. Уларҙың мотоуҡсылар полкы ҡаршыһында ятҡан немецтар, бар көстәрен һалып, киңәт кенә контратакаға күсте һәм Усмандарҙы ҡыҫырыҡлай башланы. Шул мәл, һул ҡулының беләгенә немец пуляһы килеп тейҙе. Ҡул һөйәген һындырып, үтә сығып та китте... Гимнастерка кеҫәһенән марля сығарып, ятҡан килеш яраһын бәйләп бөтөүгә, аңын да юғалтты. Бәлки, аңһыҙ килеш оҙаҡ та ятмағандыр. Ул һушына килгәндә, уйһыуыраҡ урында, автоматының өҫтөндә йөҙтүбән ята ине. Яҡында ғына, ун биш-егерме аҙым тирәһендә ҡуйы урман башлана. Тирә-яҡ беҙҙең һәм немец һалдаттары мәйете менән тулған. Был ер ваҡытлыса дошмандар ҡулында икәненә тиҙ төшөндө Усман. Тәүҙәрәк килгән немецтар уны үлгәнгә һанап, үтеп тә киткәндәрҙер, әммә яҡында ғына ике дәү немец һалдаты күренде. Үҙ-ара ниҙер мығырҙап һөйләшә-һөйләшә совет һалдаттарының мәйеттәрен типкеләп-тикшереп ҡарап киләләр. Автоматтан атып, яралыларҙы үлтереп йөрөйҙәр... Яй ғына баҫып килеүҙәренә ҡарағанда, былары - таҙартыусылар. Алғы һыҙыҡҡа әллә ни ашыҡмағандары күренеп тора. Усман хәрәкәтһеҙ ҡалды. "Йә раббым, ошо урында ғынамы минең үлемем... Лә иләһә илаллаһ..." Ошо минутта ул үлемен ҡаршы алырға әҙер ине. Ҡабырғаһына көслө тибеүҙән Усман ирекһеҙҙән ыңғырашты. "Хәҙер автомат очереды буласаҡ, һәм ул яҡты донъя менән хушлашасаҡ... Әсәй..."

Ниндәйҙер мөғжизә менән, немец атманы. Әллә патронын йәлләне, әллә ни... Тик каска кейгән башына немецтың береһе автомат төйҙәһе менән һәйбәт көслө итеп тондорҙо, ә икенсе уң яҡ ҡалаҡ һөйәгенә бар көсөнә һуғыу менән Усман тағы ла һуштан яҙҙы. Аңһыҙ ятҡан Усман артабан ни булғанын белмәй. Үлде, тип уйлап, фрицтар артабан киткәндәрҙер, моғайын... Ҡупмелер ятҡандан һуң аңына килгәс, үҙен ошо мәлдә инде әсирҙәләр, тип уйланы. Һаҡ ҡына күҙҙәрен асып ҡараны. Тегеләр юҡ ине. Аллаһы Тәғәлә, бәлки, әсәһенең көн-төн ҡылған доғаларын ҡабул иткәндер... Ул - тере! Әсирҙә лә түгел! Автоматын ҡулына алды ла Усман, бар көсөн йыйып, эйелә-боҫа яҡындағы урманға йүгерҙе. Партизан ояһы булған урманға ҡапылда тығылырға немецтар ҡурҡа икәнен ишетә-белә ине һалдат. Белоруссия урманы ла, Башҡортостандағы һымаҡ, һәр төрлө ашарға яраҡлы үҫемлектәргә бай икән... Ҡымыҙлыҡ, һарына, балтырған кеүек үләндәр, әлбиттә, Усманға бик-бик таныш. Ана шул һәр төрлө үлән менән генә туҡлана-туҡлана, өс көн, өс төн урманда аҙашып йөрөгәндән һуң, тамам хәлдән тайып, бер оло юлға килеп сыҡты. Шешенеп барған яралы ҡулы ла тәҡәтһеҙ әрней. Тән температураһы ла күтәрелгән, буғай. Теге немец һуҡҡан уң ҡалаҡ һөйәге лә ныҡ ҡына ауырта, моғайын, ярсылғандыр... (Уйының ошо урынына еткәс, Усман ҡарт инде етмеш йылға яҡын әрнегән уң ҡалаҡ һөйәгенең тағы ла һыҙлауын тойҙо...) Кинәт машиналар геүелдәгән тауыш ишетелде. Тәүҙәрәк юл ситендәге түңгәклеккә боҫто. Килә ятҡан техникалы ғәскәр, бәхеткә, үҙебеҙҙекеләр булып сыҡты. Хәлһеҙләнгән яралы һалдатты шунда уҡ ялан госпиталенә оҙаттылар. Госпиталдә ике айҙай ятып, яраһы уңалғас та, үҙенең часына ебәреүҙәрен үтенде. Әммә госпиталь начальнигы, оло ғына медицина подполковнигы: "Часыңды барыбер ҡыуып етә алмаясаҡһың, һалдат. Дары еҫен татыған һалдаттар бөтә частарға ла кәрәк. Ана, һине алырға бер артиллерист килгән", - тине. "Артиллерист һөнәрле түгелмен. Мин - пехотасы". "Ничего, солдат, научим", тине артиллерия капитаны. Усманға кәрәк булған документ-фәләнде алдан әҙерләп тә бөткән булғандар икән. Уның менән бергә төҙәлеп сыҡҡан ете-һигеҙләп һалдатты "полуторка" машинаһына тейәп алып та киттеләр.

- Сулейманов, прими пополнение, - тине уларҙы оҙатып килеүсе капитан. - Һиңә иң яҡшыларын һайлап алып килдем, - тип шаяртты. Ләкин уның шаяртыуы үтә лә етди ине. Сөнки ул саҡтағы урыҫ офицерҙары әйтмешләй, "обстрелянный", йә иһә "дары еҫе еҫкәгән" һалдаттар алғы һыҙыҡтағы һәр бер часта алтынға бәрәбәр ине.

- Ҡайҙан? - тип һораны йөҙгә үтә лә етди күренгән ҡара ҡашлы, уҫал ҡарашлы өлкән лейтенант тап-таҙа башҡорт телендә.

- Баймаҡ районынан, - тине яҡташын осратҡанға бер аҙ күңелләнеп киткән Усман комбаттың түшендәге алтын йондоҙона ҡарап.

- Ниндәй һөнәрең бар?

- Автоматсы.

- Бында барыһы ла автоматсылар. Заряжающий булырһың, әлегә. Старшина, һалдатты ҡабул итеп ал, - тип бойорҙо ла, етеҙ генә атлап, китеп барҙы.

Аҙ һүҙле, ҡыйыу, уҫал батарея командиры ҡулы аҫтында хеҙмәт итергә эләгеүенә һөйөндө ул. Сығышы буйынса Краснокама районынан булған Советтар Союзы Геройы Сөләймәнов Шәриф Сөләймән улы менән бергә хеҙмәт итеүенә һаман да ғорурлана. Ҡурҡыу белмәҫ командирың, өҫтәүенә, үҙ башҡортоң янында һуғышыу, дәүеренә күрә, үҙе бер бәхет ине шул. Һалдаттар менән бер котелоктан ашап, бергә окоп төбөндә йоҡлап йөрөгән был яҡташы тәү күреүҙә генә уҫал тойолған икән. Ифрат та изге күңелле кеше булып сыҡты ул. Бер ҡасан да ябай һалдаттың көнкүрешенән ситкә тайпылманы. Һәр саҡ беренсе нәүбәттә уларҙы ҡайғыртыр булды...

Инде хәҙер артиллерист булып киткән Усман тәүҙә снарядтар ташыны, унан танкыларға ҡаршы ата торған етмеш алты миллиметрлыҡ пушканың заряжающийы һөнәрен үҙләштерҙе. Шул арала төҙләп атырға ла өйрәнеп алды. Наводчик яраланып, госпиталгә ингәс, расчетта иң яуаплы тип һаналған төҙләп атыусы вазифаһына тәғәйенләнеләр. Шул расчеты менән һәр саҡ алғы һыҙыҡта, фашистарҙың башына етә-етә, шул уҡ ваҡытта үҙ иптәштәрен дә юғалта-юғалта, көҙгә Польша ерендә һуғыша ине инде ул.

Яңы 1945 йылды Польша ерендә ҡаршыланы. Люблин, Седельце, Лодзь, Гнезен, Познань ҡалаларын һәм һанһыҙ күп ауылдарҙы азат итеп, сәнәғәт ягынан әһәмиәтле булған пункттарҙы, тимер юл селтәрҙәрен баҫып алыуҙа ҡатнашҡан частар составында үҙенең еренә си-

генгән һайын нығыраҡ ҡаршылыҡ күрһәтә барған фашистарҙы эҙәрлекләне Усман. Ана шул алыштарҙың береһе ваҡытында юғары командующийҙың бойороғо менән өсөнсө дәрәжә Дан ордены менән наградланды.

Март айы көндәренең береһендә, уларҙың инде Германия ерендә торған позицияһына алғы һыҙыҡҡа бер-нисә генерал һәм офицер оҙатыуында маршал Георгий Жуков килде. Һуғышсыларҙы дәртләндереү ниәте менән окопҡа төшкән был оло начальник башына кокардалы папаха, ә өҫтөнә күндән тышланған погонһыҙ ҡыҫҡа тун кейгән. Бер-ике һалдаттан ашау, кейем яғын һорашҡас, ни өсөндөр, иғтибарын Усманға йүнәлтте. Бәлки, һалдаттар араһында иң йәше булғанғалыр, әллә урыҫ булмаған милләттән икәне күренеп торғанға... "Ҡайһы яҡтан һин, сынок?" тип һораны. Һалдат үҙенең Башҡортостандан икәнен әйткәс: "Башҡорттар ҡыйыу халыҡ, мин уларҙың батырлығын Петроградты Юденичтан һаҡлағандан һәм Польша фронтынан беләм. Салауат нәҫелдәре бирешмәҫ. Тиҙҙән Берлинды штурмлаясаҡбыҙ. Алыш бик ҡаты буласаҡ", - тине.

"...Дошманды Польша еренән ҡыуып сығарҙыҡ, хәҙерге көндә уларҙың үҙенең ерендә һуғышабыҙ. Берлин ҡалаһына 40 саҡырым ғына етмәй торабыҙ. Был Берлин ҡалаһы ла тиҙҙән беҙҙеке буласаҡ..." Латин хәрефтәре менән әсәһенә яҙылған ошо өсмөйөшлө хаты әле булһа ла иң ҡәҙерле әйбер булып һаҡланып килә. Һуңғы хаты...

...Утыҙынсы март иртәһе. Тиҫтәләгән немец танкыһы Усмандарҙың нығынған позицияһына табан килә башланы. Ике яҡтан да көслө атыш башланды. Уларҙың дошмандың бер-нисә танкыһын яндырып өлгөргән расчеты янында снаряд шартланы. Бар донъяның аҫты-өҫкә әйләнде. Унан тынлыҡ һәм ҡараңғылыҡ... "...Лә иләһә иллаллаһ..." Усман сираттағы мәртәбә яҡты донъя менән хушлашты... Башҡа бер ни ҙә хәтерләмәй ул. Тәүҙә эвакогоспиталь, унан Новосибирск ҡалаһындағы тыл гопитале, башынан һәм эске ағзаларынан снаряд ярсыҡтарын алыу буйынса әллә нисә ҡатмарлы операция...

* * *

Төрөлгән шинелен яуырын аша элеп, арҡаһына тоҡсай аҫҡан, башына пилотка, аяғына кирза итек кейгән Усманды Ҡуяндар ауылынан ике-өс йөҙ метр арала ятҡан Сарҙаҡ тауы итәгенә тиклем ике санитар оҙатып килгәнен әсәһе һәм башҡа ауылдаштары аша ғына белә. Санитарҙарҙың ни өсөн шунан ары үтеп, ауылға инмәгәндәре ошо көнгәсә сер булып ҡалды...

Һай ғына булған Саҡмағош йылғаһы аша сығып әсәһе уны ҡосаҡлап алды.

- Ҡайттыңмы, балам?.. - Баштараҡ үҙ күҙҙәренә үҙе ышанмайыраҡ торҙо инде Усманының ҡайтырына өмөтөн өҙгән Хөсниямал инәй. Сөнки һуғыш тамамланыуға ла ике ай самаһы ваҡыт үтеп киткәйне инде. Тере яугирҙар барыһы ла тиерлек ҡайтып бөткән...

Әсәһенең шул мәлдәге илаулаған йөҙөн генә бер аҙ хәтерләй Усман. Әммә тауышын ишетмәне. "Һаумы, әсәй!" тип әйтергә лә уҡталды ул, әммә "һа... һа..." тигән генә өндәр сығара алды. Немец танкыһы снаряды ярсығы ингән баш мейеһенең ауыр контузияһы уны ҡолаҡтан һәм телдән дә яҙҙырған. Бөтә Европаны шыуышып, йә иһә йәйәүләп тигәндәй үткән, сәстәре салланып өлгөргән был яугирға әле ун туғыҙ ғына йәш ине...

Контузиянан әле арынып етмәгән, ымлап ҡына һөйләшә алған яугир һуғыш йылдарында бөлгөнлөккә төшкән ауыл хужалығын күтәреүгә ең һыҙғанып тотондо. Әммә шул осорҙа ла әле һалдат гимнастеркаһын да һалмаған Усманды ҡайһы бер фронтҡа бармай ҡалған яҡташтарының "кулак балаһы" тигән әр менән әленән-әле үртәүе бигерәк тә үкенесле ине... Ул ғына ла түгел, хатта һикһәненсе йылдарға тиклем был һүҙҙе унда-бында булһа ла ишеткеләргә тура килгеләне.

Ниһайәт, һуғыш тамамланыуға ла ике йыл ваҡыт үтеп китте. Колхоз йомошо буйынса Темәстән алыҫ булмаған Әмин ауылына килде Усман. Иген тогында унһыҙ ҙа көнгә янған битенә саң ултырған, ҡымырҫҡа һымаҡ унда-бында етеҙ генә йүгереп эшләп йөрөгән ҡара ҡашлы, ҡара күҙле, йәтеш кәүҙәле йәш кенә ҡыҙға бер ҡарауҙа ғашиҡ булды ла ҡуйҙы егерме беренсе йәш менән барған егет. Ымлап булһа ла һөйләшеп, былтыр ғына Молотов өлкәһендә хеҙмәт әрмеһенең әсе-сөсөһөн татып ҡайтҡан ун ете йәшлек Раҡия менән танышып, бергә тормош ҡорорға килештеләр. "...Теле булмаһа ла, төҫкә бигерәк тә һылыу ине шул егетем. Шуның өсөн дә һис бер икеләнеүһеҙ сыҡтым да киттем уға тормошҡа", - тип, ҡарсығының башҡаларға һөйләүен иҫкә алып, бер аҙ көләмһерәп ҡуйҙы. Уның йылмайыуын күреп, Раҡия әбей "Бабай төш күрә, буғай", тип уйланы...

* * *

Ҡырҡ йылдан ашыу колхоз эшендә эшләп, хаҡлы ялға сыҡты Усман олатай. Шул йылдарҙа әкренләп ишетә, һөйләшә лә башланы. Раҡия инәй менән иңгә-иң терәшеп, ифрат та татыу ғаилә булып бергә йәшәгәндәренә лә алтмыш биш йыл тулып үтте. 9 бала үҫтереп, 21 ейән һәм ейәнсәрен, 25 бүләһен күреү бәхетен насип иткән икән Аллаһы Тәғәлә уларға. Етмешенсе йылдар аҙағында, хөкүмәттең ваҡ ауылдарҙы бөтөрөү буйынса сираттағы сәйәсәтенә ярашлы, йәмле Саҡмағош йылғаһы буйын ташлап, Ҡуяндарҙан күрше Байым ауылына күсеп килергә мәжбүр булғандарын да бөгөнгөләй хәтерләй ул. Йортҡураны бөтөнләйгә емереп, күсенеп, яңынан төҙөү мәшәҡәттәре шаҡтай ауыр булһа ла, башҡа әллә күпме ҡыйынлыҡтар күргән кешегә быныһы ғына әле түҙерлек икән... Утыҙынсы йылдары емертелгән Байым мәсете урынына яңынан ғибәҙәт йорто төҙөүгә лә ифрат әүҙем тотондо Усман олатай. Шул мәсьәлә буйынса район хакимиәте тупһаһын әллә күпме тапарға тура килде уға. Хәлитов Зәки, Вәлиев Әнүәр олатайҙар менән берлектә, башҡа ауылдаштары ярҙамында, туҡһанынсы йылдар башында бынамын тигән өр-яңы мәсет тә төҙөп ултырттылар. Әлхәмдулиллаһ, һуңғы осорҙа хөкүмәт тарафынан ветерандарға иғтибар шаҡтай артты. Ике йыл ғына элек Усман олатайға һәр уңайлыҡтары булдырылған өс бүлмәле фатир бирелде...

Йәшләй генә атаһыҙ ҡалған Усман олатайҙың, уның апаһы - Кинйәбикә инәйҙең дә балалары илебеҙҙең төрлө төбәктәрендә тормош көтә. Әйтергә кәрәк, ифрат та етеш йәшәйҙәр. Эш һөйөүсәнлек кешеләргә быуындан-быуынға, бәлки, ҡан аша ла бирелә торғандыр... Кинйәбикә инәйҙең бер улы хаҡында айырым әйтке килә. Баймаҡ районында ғына түгел, республикала исеме билдәле булған арҙаҡлы шәхес ул. Һәләтле, абруйлы хирург, медицина фәндәре кандидиты, Башҡортостандың атҡаҙанған табибы Миңлеғәле Ишмөхәммәт улы Ғүмәров, үҙ ғүмерендә меңәрләгән кешенең һаулығын, ғүмерен һаҡлап алып ҡалыуға булышлыҡ иткән кеше.

Алтмыш һигеҙ йыл элек алынған ауыр контузия эҙемтәһе - әленән-әле баш әйләнеү өйәнәктәренән яфаланыуына ҡарамаҫтан, отставкалағы гвардия ефрейторы Арыҫланов Усман Дәлхә улы йыл да Еңеү көнө байрамына беренсе дәрәжә Ватан һуғышы, өсөнсө дәрәжә Дан ордены һәм башҡа ун бишләп миҙал тағылған пинжәген кейеп, ауылдаштары менән осрашырға клубҡа килә. Хәҙер инде фронтовиктарҙан бер үҙе генә тороп ҡалды ул. Бәлки, әле ғүмер башында ғына яҡты донъя менән хушлашҡан атаһы, ағалары өсөн йәшәргә лә яҙғандыр уға.

Ауылда оҙон исемлектәр яҙылған ике обелиск тора. Береһе - утыҙынсы йылдарҙағы репрессия ҡорбандарына арналған, ә икенсеһе - Бөйөк Ватан һуғышында яу ҡырында ятып ҡалған ауылдаштар өсөн. Тәүге исемлек "Абдулов Дәлхә Арыҫланғол улы..." тип башлана. Икенсеһендәге тәүге исемдәр - "Арыҫланов Әҙеһәм Дәлхә улы, Арыҫланов Исмәғил Дәлхә улы..."

"Арыҫланов Усман Дәлхә улы, ә һин үҙең йөҙ йәшә!" тип әйтке килә...

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# АУЫЛЫМА ҠАРАЙЫМ ДА...

## илем өсөн борсолам

**Рауил ЙӘНСУРИН, Баймаҡ районының Темәс ауылы биләмәһе хакимиәте башлығы:** Халҡыбыҙҙың бөгөнгө йәшәйеше тураһында бер төрлө генә әйтеү мөмкин түгел. Бер ҡараһаң - ыңғай тип аталырлыҡ күренештәр ҙә күп һымаҡ, икенсе яҡтан, барыһын да алда гөл тип әйтеү ҙә дөрөҫ булмаҫ, хәл итеүҙе талап иткән мәсьәләләр, хатта ҙур проблемалар ҙа етерлек. Милләттәштәребеҙҙең күпселеге ауыл ерендә көн күреүенән, үҙемдең ауыл кешеһе булыуымдан сығып, һүҙ ауыл йәшәйеше тураһында барыр.

Ауыл кешеһенең сей яраһы - эшһеҙлек. Сәбәптәре төрлө-төрлө: колхоз, совхоз, леспромхоздар бөтөрөлөүе, мәҙәниәт, һаулыҡ һаҡлау һәм мәғариф учреждениеларының оптималләштерелеүе, әлегә һаҡланып килгән бюджет учреждениеларында эш хаҡының түбән булыуы һәм башҡалар. Шәхси эшҡыуарлыҡты әлеге ауыр хәлдән сығыуҙың бер юлы булараҡ ҡабул итеү ҙә, ярты быуаттан ашыу формалаштырылған совет менталитеты арҡаһында, һүлпәнерәк бара. Шулай ҙа беҙҙең ауылда өс тиҫтәгә яҡын ағас эшкәртеү хужалығы - шәхси пилорамалар барлығын, ауылдаш егеттәрҙең таш эшкәртеү эшен йәйелдереүен, ауыл халҡының мал-тыуар көтөп, ит-мал һатып, аҡса эшләүен, йылҡысылыҡтың, ҡымыҙсылыҡтың киң сәскә атыуын ыңғай миҫал булараҡ әйтеү кәрәк. Темәстә эшләйем тигән кешегә эш етерлек. Ә бына эш табырға, эшләргә тырышҡандар күптәр, тип әйтеп булмай әлегә. Үҙ эшен асҡансы, кешегә ялланыуҙы хуп күрә күптәр. Беҙҙең ауылдан 100 кеше ситтә хеҙмәт итә. Балыҡ - тәрән урынды, ә кеше - аҡсалыраҡ урынды үҙ итә инде. Әле һанап үтелгәндәр - проблемаларҙың бәләкәй бер өлөшө генә, ләкин улар ҙа кисекмәҫтән хәл итеүҙе көтә.

Ә хәҙер һәр проблемаға, беҙҙең ауыл биләмәһе хәлдәренән сығып, айырым туҡталайыҡ. Мәғариф учреждениеларын оптималләштереү процесы арҡаһында, республикабыҙҙың меңәрләгән ауылдарындағы кеүек үк, Темәс ауыл хакимиәте биләмәһенә ҡараған элек гөрләп торған Бетерә ауылы урта мәктәбе башланғыс мәктәпкә әйләндерелгәс, бөгөн дүрт синыфта 11 бала уҡый. Уларға белем биреү бер уҡытыусыға йөкмәтелгән. Ә хәҙер уйлап ҡарайыҡ: бөгөнгө ҡағыҙ тултырыу сәскә атҡан заманда бер уҡытыусыға бер юлы дүрт синыф өсөн документация, план-конспекттар һ.б. ҡағыҙҙар тултырып ултырыуы нисек икән? Ул уҡытыусы, ни тиклем генә квалификациялы булмаһын, билдәле, уҡыусыларға, ҡырҡҡа ярыла яҙып эшләп, етерлек белем бирә алмаясаҡ һәм бындай шарттарҙа эшләргә лә теләмәйәсәк, әлбиттә. Ауыл мәктәптәренә бындай ҡараш менән килешә алмайбыҙ. Шул уҡ бәләкәйерәк ауылдарҙа йәшәгән балалар ҙур ауылдарға автобустар менән ташып уҡытылһа ла, юлдарҙы көрт баҫыуы, ағас ташыусы йөк машиналары йөрөүе арҡаһында килеп тыуған хәүеф тә иҫәпкә алынмай. Мәғариф министрлығы был мәсьәләләргә һаман асыҡлыҡ индерергә ашыҡмай, ниңәлер. Мәғариф, һаулыҡ һаҡлау һәм мәҙәниәт учреждениелары - ауылды тотоп торған өс таған да бит, ләкин һуңғы ике өлкәгә лә иғтибар кәмене, уларҙы ла оптималләштереү дауам итә. Ҡайҙа барабыҙ? Был таған ҡолаһа, ауыл да йәшәй алмаҫ. Элекке "киләсәкһеҙ" ауылдар заманы килдеме әллә, тип тә хәүефләнеп ҡуябыҙ. Йәнә, юғарыла ултырыусыларҙың ауыҙынан йыш ҡына телде, милли матбуғат баҫмаларын һаҡлау тураһында һүҙҙәр ишетелеп ҡала. Ләкин, ғәмәлдә, быбың киреһе эшләнә. Почта хеҙмәте - таралыр хәлдә. Милли матбуғатты таратыу - ауыл хакимиәте башлыҡтары ғына хәл итер эш түгел: теләк ни тиклем көслө булғанда ла, йөрәк янып торғанда ла, дәүләттән матди ярҙамһыҙ алға китеш булмаясаҡ. Ауылынан йөҙ борған дәүләт - ниндәй дәүләт һуң?

Милләттәштәр! Балаларыбыҙҙы, йәштәребеҙҙе, нисек тә булһа, һөнәрле итәйек. Бөтәбеҙгә лә эшҡыуар, юрист, иҡтисадсы йә психолог булырға тимәгән. Бөгөн тракторсы, иретеп йәбештереүсе һымаҡ һөнәр эйәләренә лә ҡытлыҡ һиҙелә. Ошондай һөнәрҙәр ярҙамында булһа ла, үҙебеҙҙе һаҡлап ҡалырға тырышайыҡ. Эшһеҙ, битараф булмайыҡ.

**Иҙел РӘХИМОВ яҙып алды.**

✓ Тағы биш, ун, егерме, утыҙ йылдан нимә буласаҡ? Егерме биш меңлек район йыл һайын 500 кешеһен юғалта! Ябай математик иҫәпләүҙәрҙән сығып фекер йөрөтһәк, тағы бер-ике быуындан һуң был ерҙәр буш тороп ҡаласаҡ.



ИНТЕРНЕТТАН



# БАЛЛАП СӘЙ ЭС...

## һау булырһың

■ Табиптар әйтеүенсә, ғүмер оҙайлы булһын өсөн сәләмәт йәшәү рәүеше алып барырға кәрәк. Ә бына "Forbes" журналы 100 йәштән уҙған кешеләрҙән һорау алып, уларҙың оҙаҡ йәшәү серен асыҡларға тырышҡан. Баҡтиһәң, 100 йәшлек иң сәләмәт кешеләр Японияла йәшәй икән, сөнки улар йәшелсәне, балыҡты күп ашай. Йомортҡа, ит, һөт аҙыҡтары бында аҙыраҡ ҡулланыла. Мәҫәлән, АҠШ-та йәшәүсе Дэйзи Макфадден уларҙың миҫалына эйәреп, емеш-еләк, балыҡ, йәшелсә менән туҡлана, уға ноябрь айында 101 йәш туласаҡ. Оҙаҡ йәшәүселәр кәңәш итеүенсә, газлы эсемлектәр сәләмәтлеккә зыян килтерә. Уның урынына һыу, мүк еләге һуты, һөт йәки сәй эсергә кәрәк. Ҡәһүә һәм алкоголле эсемлектәр тыйыла. Шулай ҙа ҡайһы берҙә үҙеңә яратҡан аҙыҡтарыңды ашарға рөхсәт итергә кәрәк, ти табиптар. Көн һайын нимә менәндер шөғөлләнеү шулай уҡ ғүмерҙе оҙайта. Телевизор алдында ултырыуға ҡарағанда, хәрәкәт итеү күпкә яҡшыраҡ. Баҫҡыстан йәйәү менеү, урамда йөрөп килеү шулай уҡ сәләмәтлек сығанағы икән. Доктор Эрик Раков әйтеүенсә, баш мейеһе лә ял итергә тейеш түгел. Бының өсөн иң ябай ысул булып кроссвордтар сисеү тора. Берәй музыка ҡоралында уйнау ҙа мейене йәш көйө һаҡлай. Оло кешеләр өсөн доғалар уҡыу ҙа кәрәк, был уларҙы тынысландыра һәм оҙайлы йәшәүгә булышлыҡ итә. Психиатр Гэри Кеннеди раҫлауынса, йәштәр менән аралашыу, уларҙы тәрбиәләү шулай уҡ үҙеңде кәрәкле итеп тойорға мөмкинлек бирә.

■ Бал ҡушып сәй эсеү күҙҙәрҙе компьютерҙың насар тәьҫиренән һаҡлай. Табиптар бының өсөн сәйҙе көнөнә өс тапҡыр эсергә кәрәк, тип иҫәпләй. Бал яратыусылар компьютерҙа көнө буйы эшләһәләр ҙә, артыҡ бирешмәйәсәк. Күҙҙәр өсөн бигерәк тә йүкә, ҡандала үләне балы файҙалы. Ғөмүмән, компьютер артында эшләгәндә үҙеңә ял биреп алыу мөһим. Бер сәғәт эшләгәс, мотлаҡ 20 минут ял итергә кәрәк. Тап ошо ваҡытта баллап сәй эсеп алырға ярай ҙа инде, ти табиптар. Ҡандала үләне балы тын юлдары ауырыуҙарынан, баш ауыртҡанда, йоҡлай алмағанда, шулай уҡ йөрәк ауырыуҙарынан файҙалы. Ул коронар ҡан тамырҙарын киңәйтә, ҡан әйләнешен яҡшырта, ҡан баҫымын яйға һала. Йүкә балы йөрәк-ҡан тамырҙары һәм нервылар системаһы ауырыуҙары менән яфаланыусыларға тәҡдим ителә. Ул стресты, көсөргәнеште юҡҡа сығара, матдәләр әйләнешен яҡшырта.

■ Кешелектең 95 проценты ҡулын дөрөҫ йыумай. Бары тик 5 процент кешеләр генә гигиена ҡағиҙәләрен теүәл үтәй. Күптәр ҡулды йыуыуға 6 секунд ҡына ваҡыт бүлә, ә ҡурҡыныс бактерияларҙы үлтереү өсөн ҡулдарҙы 15-20 секунд һабынлап, ағып торған һыуҙа йыуырға һәм таҙа таҫтамалға һөртөргә кәрәк. АҠШ-тың Мичиган университетында үткәрелгән тикшеренеүҙәрҙән табиптар ошондай һығымтаға килгән. Статистика күрһәтеүенсә, яуап биреүселәрҙең өстән бер өлөшө һабын менән һирәк ҡуллана, ә 10 проценты ҡулдарын бөтөнләй йыумай тиерлек. Ҡатын-ҡыҙҙар ир-егеттәргә ҡарағанда күпкә таҙараҡ булып сыҡҡан.

УЙЛЫҒА - УЙ

# ҺИНЕҢ РАЙОНЫҢ...

## һинең Ватаның икәнде аңлау кәрәк

**Башҡортостан Республикаһы Президентының интернеттағы блогында бер юлы ике төрлө яңылыҡҡа юлыҡтым. Яҡшы хәбәрҙән башлайым.**

Башҡортостан Урал, Волга төбәктәре араһында иң "йәше" икән. Беҙҙең республикала йәшәгән халыҡтың уртаса йәше - 37,88. Иң "карт" Пенза өлкәһендә был күрһәткес - 41,17 йәш. Ә рәсәйлеләрҙең уртаса йәше - 39,06. Был, һис шикһеҙ, яҡшы яңылыҡ. Рәсәйҙә дөйөм демографик хәлдең әллә ни яҡшы булмауын иҫәпкә алғанда, йәштәр һанының күберәк булыуы киләсәккә яҡты өмөттәр уята. Ошо потенциалды дөрөҫ ҡулланғанда үҫеш булыуы бик мөмкин.

Насар яңылыҡҡа килгәндә. Республиканың иң "оло" кешеләре Борай районында йәшәй. Халыҡтың уртаса йәше - 43,49. Унан ҡала - Балтас (41,6) һәм Стәрлебаш (41,42). Иң йәше - бөрйәндәр. Уртаса күрһәткес - 32,54 йәш. Унан ҡала Әбйәлил (34,04) һәм Хәйбулла (34,72), ҡалалар араһынан Баймаҡ (34,08), Сибай (35,70), Нефтекама (36,22) йәштәр араһындабыҙ тип маҡтана ала. Иң "оло ҡала" - Күмертау (38,86).

2011 йылда республикала 1 мең кешегә 13,8 бала тыуған, 13,4 кеше үлгән. Тыуым буйынса Башҡортостандағы иң түбән күрһәткес тағы ла Борай районында (10,6), унан ҡала - Балтас (10,9). Мишкә (17), Ҡалтасы (17,4), Бөрйән (21,6), Әбйәлил (18,6) райондарында хәлдәр арыу ғына. Үлеүселәр һаны буйынса Борай районы тағы ла "алдынғылар " рәтендә. Бында 1 мең кешегә 19 кеше донъянан киткән. Миграцияны ла иҫәпкә алғанда, Борай районынан китеүселәр һаны килеүселәр һанынан 344-кә күберәк, район халҡы 551 кешегә кәмегән.

Урынлы һорау тыуа: тағы биш, ун, егерме, утыҙ йылдан нимә буласаҡ? Егерме биш меңлек район йыл һайын 500 кешеһен юғалта! Ябай математик иҫәпләүҙәрҙән сығып фекер йөрөтһәк, тағы бер-ике быуындан һуң был ерҙәр буш тороп ҡаласаҡ, тип раҫларға була. Райондың киләсәге бармы? Эштәр былай дауам итһә, юҡҡа сығасаҡбыҙмы? Ышанмаҫлыҡ, ҡабул итеп булмаҫлыҡ хәл кеүек. Көндәлек ығы-зығы ҡосағында йәшәгәндә, был турала уйланып та ҡарамайһың. Ләкин быларҙың мөмкин булмаҫтай хәбәр түгеллегенә инандырырға мәжбүр иткән сәбәптәр ҙә бар. Яңыраҡ ҡына беҙ ауылдарҙың юҡҡа сығасағына ышанмай инек - бөгөн был ысынбарлыҡ. Әле күптән түгел ауылдарҙа мәктәптәр ябылыуын күҙ алдына ла килтермәнек - бөгөн ундай миҫалдар тулып ята. Яҡын киләсәктә ябылыу ҡурҡынысы аҫтында торған мәктәптәр хаҡында ла ишетәбеҙ. Район ауылдарҙан тора. Ауылдарҙың юҡҡа сығыуы - райондың юҡҡа сығыуын аңлата. Бөгөнгө көндәге тыуым, үлем, миграция күрһәткестәре һаҡланғанда, бынан ҡасып булмаҫ кеүек. Ни өсөн былай? Ни эшләргә?

Илдус ФӘЙРУШИН.
Борай районы.

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

# ЙӨҘҘӨҢ КҮРКЕ...

## күҙ булыр

**"Кеше күрке йөҙ булыр, йөҙҙөң күрке күҙ булыр". Халыҡ телендә шундай әйтем йәшәй йәшәүен, ләкин иң тәүҙә күҙҙәрҙең матурлыҡ өсөн кәрәклеген түгел, ә унан күпкә мөһимерәк тәғәйенләнеше - донъяны танып-белеүҙәге роленең тәүге урында тороуын иҫбатларға кәрәкмәйҙер, сөнки, белгестәр әйтеүенсә, кеше 80 процент самаһы мәғлүмәтте күреү һәләте ярҙамында ала.**

"Күҙ күрмәй, күңел ышанмаҫ", "Күҙ күреүҙән туймаҫ", "Ҡолағың менән ишет, күҙең менән эш ит", тигән бит шуға күрә халҡыбыҙ тағы ла. Иң ҡәҙерле, ҡиммәтле нәмәләрҙе лә бит күҙ ҡараһы кеүек һаҡларға өйрәтәләр бәләкәйҙән, тик бына шундай уҡ ныҡышлыҡ менән күҙ ҡараһын һаҡлауға ла иғтибар ителһен ине. Күҙ ауырыуҙарының ни тиклем киң таралғанын үҙ күҙҙәрегеҙ менән күргегеҙ килһә, юрый ғына бер инеп ҡарағыҙ Өфө ҡалаһының Пушкин урамындағы Өфө күҙ ауырыуҙары ғилми-тикшеренеү институты поликлиникаһына: аяҡ баҫыр урын тапһағыҙ... Күҙҙәре 100 процент күргән, сәләмәт балалар, йәштәр өсөн бындай "экскурсия" үҙенә күрә бер һабаҡ та булыр ине, бәлки. Аптырағандан әйтәм инде, берәү ҙә махсус тамаша ҡылыр өсөн шунда барып йөрөмәйәсәк һәм ҡушмаһын да Хоҙай ул юлда йөрөргә. Өлкән йәштәгеләрҙә, ярай, күҙ ауырыуы булһа ла, ҡартлыҡтың үҙ ауырыуы, тигәндәй, уларҙың күпселеге был йәһәттән ҡотолғоһоҙ хәлдә. Ә бына йәш быуынды әлегесә бәләкәйҙән дөрөҫ санитар-гигиена талаптарында тәрбиәләү бик кәрәк тә бит...

Үкенескә ҡаршы, беҙҙең медицина фәҡәт сирлеләрҙе дауалау менән мәшғүл, ә сирҙе булдырмау, халыҡты сәләмәт йәшәү рәүешенә күндереү, иҫкәртеү саралары ойоштороу, әйтерһең дә, бөтөнләй уның эшмәкәрлегенә ҡағылмай.

Мәҫәлән, балалар араһында ла айырыуса әлеге осорҙа күрәшлек проблемаһы киң таралған. Өфө күҙ ауырыуҙары ғилми-тикшеренеү институтындағы балалар бүлексәләрендә дауаланыусыларҙың 30 проценты самаһы күрәшлек менән яфалана. Уларҙың сәләмәтлеген иң беренсе ата-әсәләре һәм мәктәп ҡайғыртырға бурыслы, әлбиттә, шулай ҙа медицина учреждениеларының профилактик эшмәкәрлеген дә һуңғы урынға ҡуйғы килмәҫ ине. Шуның менән бергә дауалау учреждениелары алдынғы донъя тәжрибәһенән дә ҡалышырға тейеш түгел. Был, бәлки, башҡа проблемаларға ҡарағанда ла иң мөһимелер. Ошо йәһәттән Өфө күҙ ауырыуҙары ғилми-тикшеренеү институтының донъя кимәлендә танылыу алған заманса дауалау тәжрибәһен, халыҡ-ара кимәлдә тотҡан урынын, офтальмология инновация алымдарын тәүгеләрҙән булып ҡыйыу рәүештә ҡулланылышҡа индереүен, һәр ваҡыт яңылыҡҡа, камиллыҡҡа ынтылыуын күрмәй ҡалыу һис мөмкин түгел.

Хәҙер инде офтальмохирургия буйынса һөҙөмтәле тәжрибә мәктәбенә әүерелгән "Көнсығыш - Көнбайыш" халыҡ-ара фәнни-ғәмәли конференцияның үҙе хаҡында ғына ла том-том фәнни хеҙмәттәр яҙылыҡ булғандыр, моғайын. Июнь баштарында Өфөлә булып үткән конференция был юлы ла эшлеклелеге, юғары кимәле менән айырылып торҙо. Унда Мәскәү, Санкт-Петербург, Рәсәй төбәктәре ҡалалары, БДБ илдәренән Украина, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Үзбәкстан, Молдова республикалары, сит илдәрҙән Германия, Швейцария, Япония, Һиндостан белгестәре, профессорҙар - исемдәре донъяға билдәле офтальмохирургтар ҡатнашты. Юғары кимәлдәге тәжрибә уртаҡлашыу сараһы яңылыҡтарға ла бай булды: исемдәре киң билдәле сит ил профессорҙары ҡатнашлығында күҙ ауырыуҙарын дауалауҙың заманса ысулдары күрһәтелде, лекциялар уҡылды, күргәҙмә операцияларҙан тура трансляция алып барылды. Өфө күҙ ауырыуҙары ғилми-тикшеренеү институты тарафынан катаракта хирургияһының яңы технологияһы - фемтосекундлы лазер күрһәтелде. Институттың бүлек мөдире, медицина фәндәре кандидаты Ринат Фәйзрахманов һөйләүенсә, катаракта хирургияһының был яңы технологияһы Рәсәйҙә иң беренсе булып беҙҙә ҡулланыла. Операцияларҙы лазер ярҙамында эшләүҙең өҫтөнлектәре баһалап бөткөһөҙ.

Конференция барышында театр фойеһында эшләгән махсус күргәҙмәнән күҙ табиптары ғына түгел, ә уларҙың потенциаль пациенттары - ябай кешеләр өсөн дә бик күп файҙалы мәғлүмәттәр алырға мөмкинлек булдырылғайны. Мәҫәлән, теге йәки был күҙ ауырыуҙарын булдырмау саралары, уларҙы иҫкәртеү өсөн препараттар, махсус әҙәбиәт һәм дарыуҙар каталогтары менән танышырға, уларҙы бушлай, ә ҡайһыларын һатып алырға ла мөмкин ине. Мәҫәлән, ауыл райондары поликлиникаларында күҙ табибының нисек итеп күҙ эсе баҫымын үлсәүе күптәр өсөн яҡшы таныштыр. Конференцияла ҡатнашҡан Рязань дәүләт приборҙар заводы ошо процедураны күпкә еңеләйтеүсе уникаль diathera һәм diaton офтальмотонометрҙары тәҡдим итте. Бөтә поликлиникаларҙы ла пациент өсөн уңайлы һәм хәүефһеҙ ошондай яңы быуын приборҙар менән йыһазландырыу ниндәй яҡшы булыр ине! Ғөмүмән, алдынғы тәжрибә менән уртаҡлашыу, үҙ-ара емешле хеҙмәттәшлек мәктәбенә әйләнгән был халыҡ-ара симпозиумдың әһәмиәте үҙен күптән аҡлап өлгөрҙө инде. Уның тап Өфөлә үткәрелеүенең дә ғилләһе бар: был, тимәк, Өфө күҙ ауырыуҙары ғилми-тикшеренеү институтының күп йыллыҡ ғилми һәм ғәмәли эшмәкәрлеген, абруйын халыҡ-ара кимәлдә таныу, тигән һүҙ ул.

Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.

## ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...



**"Айыҡ Башҡортостан" төбәк йәмәғәт хәрәкәте лидеры Марат Абдуллин был хатҡа ҡарата шундай фекерен белдерә:**

- Проблеманың нигеҙендә иҡтисади сәбәптәр генә ятмай. Был йәһәттән республиканың бөтә райондарында ла хәл бер кимәлдә. Сәбәптәр ошо төбәктәге халыҡтың ниндәй мәғлүмәт мөхитендә йәшәүенә бәйле. Айырым төбәктәге мәғлүмәт мөхите үҙ-үҙен юҡ итеүгә йүнәлтелгән икән, был һис шикһеҙ тормошҡа ашасаҡ. Ғәҙәттә, ялған мәғлүмәт япмаһы аҫтында йәшәгән халыҡта ғаилә ҡороу, бала табыу теләге юғала. Кешеләр йәшәгән урындарын ташлап китергә ынтыла башлай. Тәмәке, араҡы кеүек ағыулы наркотик матдәләрҙең таралыуы уларҙы юҡҡа сығарған төп ҡорал булып тора. 2012 йылда Бөрйән районы мәктәптәрендә үткәрелгән һорау алыуҙар балаларҙың әле әйтелгән ҡурҡыныс хаҡында әҙ хәбәрҙар булыуын күрһәтте. Кешеләр ошо мәсьәләнең айышына төшөнөргә тырышмай. Һөҙөмтәлә район территорияһында йәшәү шарттары яҡшы була тороп та, халыҡта тормошҡа ҡарата пессимистик ҡараш өҫтөнлөк итә. Күптәр бөгөнгө көн менән генә йәшәй. Йәштәр үҙҙәренең киләсәген тыуған райондары менән бәйләмәй, Өфөгә, Өфөнән - Мәскәүгә, Мәскәүҙән Көнбайышҡа китергә ашыға. Шул уҡ ваҡытта, тыуған районындағы йәшәү шарттарының социаль, экологик йәһәттән ҙур ҡалаларға ҡарағанда күпкә яҡшыраҡ икәнен иҫәпкә алмай, аңламай. Мегаполистар уларҙы үҙҙәренең күңел асыу төрлөлөгө менән генә ылыҡтыра.

Зарланып йәшәргә ярамай. Ашарға булмаған замандар артта ҡалды инде. Эргә-тирәгә ҡарап, үҙ районың - үҙ Ватаның икәнде генә аңларға ҡала. Тыуған төбәгебеҙҙәге хәл беҙҙең ошо хәлгә ҡарашыбыҙға бәйле. Үҙ-үҙеңде ағыулау менән шөғөлләнеүҙе туҡтатып, йәш быуынды тәрбиәләргә, уларға дөрөҫ мәғлүмәт бирергә, дөрөҫ юлдан алып барырға тырышырға кәрәк. Тормошҡа айыҡ ҡарашы булған быуын ғына яңы, сәләмәт йәмғиәт төҙөйәсәк. Ә бының өсөн мөмкинлектәр етерлек.

## ХАТАЛАР ӨҪТӨНДӘ ЭШ



# УН АЛТЫ ЙӘШЛЕК ҠАРТЛАС

### Аҙыҡ ҡабул итеү: уны аңлы сәйнәү мөһимлеге

Тән - рух ҡорамы, һәм уның тураһындағы хәстәрлек, уны камиллаштырыу - кешенең юғары көстәрен үҫтереүгә бәйле бурыстың бер өлөшө. Сирле һәм насар үҫешкән тәндә дөрөҫ фекергә урын юҡ. Бындай тән үҙенең хакимдарының - аҡыл һәм рухтың лайыҡлы ҡоралы була алмай. Хәҙерге цивилизация яһалма тормош образы тыуҙырҙы, ул кешене ихтыярһыҙ, һүлпән һәм сирләшкә итә. Беҙ дөрөҫ туҡланмайбыҙ, дөрөҫ эсмәйбеҙ, дөрөҫ йоҡламайбыҙ, дөрөҫ тын алмайбыҙ. Һөҙөмтә булараҡ, дөрөҫ үлмәйбеҙ.

Сәләмәт тәнгә юл дөрөҫ туҡланыу аша ята. Ә туҡланыу аҙыҡты нисек сәйнәүгә бәйле. Хәҙер кеше аҙыҡты йота ғына, ә был сәләмәтлек өсөн бик зыянлы. Кеше - ҡош түгел: уның аҙыҡты эшкәртә торған бөрләтәүе юҡ. Шуға күрә аҙыҡты яйлап, оҙаҡ итеп, ул шыйыҡ бутҡаға әйләнгәнсе, яйлап ирегәнсе һәм яйлап йотолғансы сәйнәргә кәрәк. Ашау сәнғәтенә эйә кеше бик оҙаҡ яңаҡтарын эшләтә, тештәрен аҙыҡҡа мөхәббәт менән батыра һәм уны теле менән иркәләй. Аҙыҡ ҡабул итеү - серле, сакраль процесс. Ашау процесында тере йән - кеше тере булмаған (аҙыҡ) менән аралаша, ә был йәшәйештең юҡлығының кеше тәненең ысынбарлығына үтеп инеүе.

Әгәр аҙыҡ бик ваҡ итеп сәйнәлгән икән, төкөрөк уны яҡшы һуғара һәм йомшарта. Һөҙөмтәлә аҙыҡ эшкәртеү ваҡытынан алда башлана һәм ашҡаҙан ауыҙ ҡыуышлығында уҡ ентекле эшкәртеү үткән аҙыҡты еңел үҙләштерә. Әгәр аҙыҡ тейешенсә кимәлдә эшкәртелмәгән, яртылаш ҡына сәйнәлгән икән, ашҡаҙан эшмәкәрлеге боҙола. Үҙләштерелеү, эшкәртелеү урынына аҙыҡ әсей башлай, ашҡаҙандағы масса серегән, тарҡалған массаға әйләнә. Бындай шарттарҙа яртылаш эшкәртелгән аҙыҡ эсәктәргә әсеү барышында барлыҡҡа килгән төрлө кислоталар менән бергә эләгә. Һөҙөмтәлә организм ағыулана. Кикереү, ауыҙҙан насар еҫ килеү, ашҡаҙандың эшләмәүе, эс ҡатыу, баш ауыртыуы, биткә һыҡкылар сығыу - улар барыһы ла бер нәмә тураһында һөйләй: кеше аҙыҡты ҡабул итә белмәй.

Мәктәп йәшендәге бәләкәй балаларҙы аҙыҡты дөрөҫ ҡабул итергә өйрәтеүе еңел. Бының өсөн тәүҙә тотош синыф өсөн бер икмәк, бер ҡап май, ҙур булмаған сыр киҫәге алырға кәрәк. Икмәктең "Столичный" йәки "Рижский" сорттары яҡшы. Шырпы ҡабы ҙурлығында ғына икмәк киҫәктәре телеп, уларға саҡ ҡына май һөртөргә һәм өҫтөнә йоҡаҡ ҡына сыр телеме һалырға кәрәк. Былар барыһы ла балалар ҡатнашлығында, конвейер ысулы менән эшләнә: кемдер икмәк телә, бер нисә кеше уларға май һөртә. Уҡытыусы сырҙы телә, балалар сырҙы майлы икмәк өҫтөнә һалып сыға. Барлыҡҡа килгән бутербродтарҙа май һәм сыр мөмкин тиклем аҙыраҡ булырға тейеш. Был бик мөһим: сәйнәү ваҡытында балалар май һәм сыр тәмен шунда уҡ түгел, яйлап тойорға тейеш. Әҙер бутербродтар парталар буйынса таратыла һәм барыһы ла көтә.

Шулай итеп, бутербродтар уҡыусыларҙың алдында. Аҡ салфеткалар өҫтөндә ҡара икмәк киҫәге ята. Өҫтөндә гәрәбәләй сыр киҫәге ялтырай. Ваҡыт 10.40: балалар ике дәрес уҡыны, асыҡты. Шарт шундай: балалар барыһы бергә ашай башлай һәм кем нисек булдыра, шулай түгел, ә уҡытыусының күрһәтмәһе буйынса ғына. Ниһайәт, уҡытыусы ҡулына үҙенең бутербродын ала һәм балаларҙы ла үҙ өлгөһөнә эйәрергә ҡуша. "Ашай башлар алдынан уйыбыҙҙа ғына беҙҙең өсөн икмәк булған игендең үҫеүенә ярҙам иткән Ай менән Ҡояшҡа рәхмәт әйтәбеҙ. Шунан Ергә рәхмәт әйтәбеҙ, сөнки ул беҙҙең өсөн май һәм сыр әҙерләү мөмкинлеге тыуҙырып, һыйырға үҙ һутын биргән, шул һут аша һыйыр елене һөт менән тулышҡан. Беҙҙең өсөн икмәк бешергән, һөт ризыҡтары әҙерләгән кешеләргә рәхмәт белдерәбеҙ. Беҙҙе был донъяға тыуҙырған, ошо аҙыҡ-түлек менән тәьмин иткән атай-әсәйҙәребеҙгә рәхмәт белдерәбеҙ".

Шунан һуң ғына уҡытыусы бәләкәй генә киҫәк икмәкте тешләп ала ла, яйлап ҡына сәйнәй башлай. Уҡыусыларҙан да икмәкте 20-25 тапҡыр сәйнәүҙәрен һорай. Һуңынан ауыҙ эсендә барлыҡҡа килгән шыйыҡ бутҡа йотола. Балалар уны ашҡаҙанға тиклем уйҙа ғына оҙатып ҡуйырға кәрәклеген, һуңынан ғына икенсе киҫәкте ҡабырға икәнен белә. Яңы ғәҙәт булдырыусы был эш йыл буйына дауам итә. Артабан бутербродты балалар үҙҙәре өйҙән алып килә, ә уҡытыусы бары тик порцияларҙың ҙур булмауын ғына тикшерә. Бутербродты бит тәнәфестә, 8 минут эсендә ашап өлгөрөргә кәрәк...

**Самат МӨХӘМӘТЙӘНОВ,**
**философия фәндәре докторы.**

## УҢЫШ ҠАҘАН



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

### Уңыштың һәм камиллыҡтың 200 төп сере

189. Көн һайын 100 тапҡыр сүгәләү күнекмәһе эшләгеҙ һәм бер көнөгөҙҙө лә ҡалдырмағыҙ. Эсегеҙҙең һәм янбашығыҙҙың көслө мускулдары сәләмәтлегегеҙҙе нығыта. Улар ҙа һеҙҙең тышҡы ҡиәфәтегеҙ һәм үҙ-үҙегеҙгә ышаныу кимәлен билдәләй.

190. Үҙегеҙ белгән иң намыҫлы кеше булығыҙ. Үҙ-үҙегеҙ менән намыҫлы һәм ғәҙел булһағыҙ, башҡаларҙың да ышанысын яуларһығыҙ.

191. Донъяуи теләктәрегеҙҙе тыйып тороғоҙ, шул ваҡытта ихтыярығыҙҙы нығыта алырһығыҙ. Матди ҡиммәттәргә ныҡ бәйле кеше уларҙы юғалтһа, ҙур ҡыйынлыҡ кисерә. Бәхетле кешеләр матур әйберҙәрҙе ярата, әммә уларға бәйле булып, уларҙың ҡолона әүерелмәй. Ябай, әйберҙәргә бәйләнмәгән һөҙөмтәле тормош менән йәшәгеҙ. Тормошоғоҙҙо ябайлаштырыу өсөн бөгөн үк телевизион техникағыҙҙың яртыһын һатығыҙ, кәрәкмәгән ҡағыҙҙарҙы һәм хаттарҙы макулатураға тапшырығыҙ, сығымдарығыҙҙы ҡыҫҡартығыҙ, машинағыҙҙы һатығыҙ, һәр иртәне медитациянан башлағыҙ һәм минут һайын шылтырап йәнегеҙгә тейгән телефонығыҙҙы мәңгелеккә һүндереп ҡуйығыҙ.

192. Әгәр бөгөн көлмәгәнһегеҙ икән, тимәк, бөгөн йәшәмәгәнһегеҙ. Күберәк көлөгөҙ. Уильям Джемс: "Беҙ бәхетле булған өсөн көлмәйбеҙ, ә тап көлгән өсөн бәхетлебеҙ", - тигән.

193. Роберт Дж. Ричардсондың һәм С. Катарин Тайерҙың "Фактор харизмы - как развить свое природное стремление к лидерству" китабын уҡығыҙ. Ул - лидер булырға ынтылған, шулай уҡ лидер булған, әммә тағы ла юғарыраҡ кимәлгә күтәрелергә теләгән һәр кем өсөн файҙалы ҡулланма.

194. Мөмкин тиклем күберәк сәйәхәт итергә тырышығыҙ. Яңы ерҙәрҙә тыуған перспективалар бик мөһим һәм беҙгә, шулай тейеш, тип ҡабул иткән көнкүрешебеҙгә икенсе күҙлектән баҡырға, уны икенсе ҡараштан баһаларға мөмкинлек бирә.

195. Ай һайын физик камиллыҡҡа өлгәшеүҙең яңы маҡсатын ҡуйығыҙ. Июлдә йөҙә башлағыҙ, ғинуарҙа - саңғыла йөрөгөҙ. Маҡсатығыҙға тиҙерәк һәм еңелерәк өлгәшеү өсөн уны яҙығыҙ, план төҙөгөҙ һәм "бары тик эшләгеҙ".

196. Һәр нәмә ике тапҡыр барлыҡҡа килә. Аҡыл һәм нимәлер тыуҙырыуға ынтылыш һәр саҡ физик ижадҡа килтерә. Шулай уҡ өй төҙөр алдынан уның һыҙмаларын йәки эскизын ҡағыҙҙа эшләгәнгә тиклем һеҙ уны һәр көн иртән уйығыҙҙа күҙ алдына килтерергә тейешһегеҙ. Ошо көндә үҙегеҙ көткән мөғжизәне визуалләштерегеҙ һәм улар төпкө аңығыҙ маҡсатҡа өлгәшеүгә фокус ҡуйыу менән матдиләшә башлаясаҡ. Тәбиғәттең тәбиғи ҡануны тап шунан ғибәрәт.

197. Тәбиғәттең матурлығына һоҡланып, эшкә йәйәү йөрөгөҙ.

198. Аҙыраҡ йоҡлағыҙ, аҙыраҡ туҙҙырығыҙ, күберәк эшләгеҙ, оҙағыраҡ йәшәгеҙ һәм һеҙ бөйөк кешегә әүерелерһегеҙ.

199. Ошо яҙмаларҙы ҡабат-ҡабат уҡығыҙ һәм уны башҡаларға ла тәҡдим итегеҙ.

**Робин ШАРМА.**



## 1 ИЮЛЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым" (12+)
13.45 "Истина где-то рядом"
14.00 Другие новости
